*Александр Македонский, кемдер икенсе берәүҙе ғәйепләп һөйләгәндә, бер ҡолағын ҡаплар булған. Унан ни өсөн шулай эшләүен һорағас, ул: "Икенсе ҡолағымды ғәйепләнеүсене тыңлар өсөн һаҡлайым", - тип яуап бирер булған.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №17 (383)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кешеләр дөрөҫ мәғлүмәт алһын,** йәки Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу Башҡортостан үҫешенең объектив картинаһын күрһәтәсәк



2

**Шаяндар, тапҡырҙар, оҫҡорҙар...** тағы алышҡа сыҡты



5

**Тупраҡ башҡорт бәхетелер,** йәки Ер тигән тәхеттең хужаһы булайыҡ



6

**Башҡорт йөрәге уяныр...** әгәр ҙә ул диненә, ғаиләһенә, зат-араһына ҡайтһа



8-9-15

14 ТВ-программа


ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺӘЙКӘЛ БУЛЫП...

## үҙ иленә ҡайта Вәлиди

Көнсығыш халыҡтары араһында киң таралған бер мәҡәл бар: "Эт өрә торор, ә каруан юлында булыр". Борон-борондан иҡһеҙ-сикһеҙ Евразия киңлектәрен төйәк иткән ҡәүемдәрҙең азатлыҡ көрәшен бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамай хәрәкәтен дауам иткән тарих каруанына тиңләп булалыр. Төрки халыҡтарын ҡоллоҡта тоторға тырышыусы империя эттәре лә уртаҡ тарихыбыҙҙа бихисап булған. XX быуат башында үҙ милләтенең юлбашсыһы булыуы менән бер рәттән, Волга буйы, Кавказ һәм Урта Азия ҡәүемдәренең бойондороҡһоҙлоғо өсөн барған милли азатлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе булараҡ киң танылыу тапҡан Әхмәтзәки Вәлиди Туғанды ла тешләп-ботарлап ташларға ниәт иткән эттәр элек тә күп булған, хәҙер ҙә аҙ түгел. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо күренекле шәхестең яҡты рухын бысратырға тырышыусылар мәкерле эштәре менән башҡорт халҡын кәмһетергә, уның азатлыҡ рухын баҫтырып торорға ниәтләй. Әммә эттәр нисек кенә шашынмаһын, улар башҡорт халҡының тарих каруанын туҡтата алмаҫ.

Көнсығышта тоҡанған Әхмәтзәки Вәлиди йондоҙо бөгөн дә бөтөн донъя күген балҡытып тора. Совет осороноң аяуһыҙ идеологик ҡанундары селпәрәмә килеү менән уның яҡты исеме лә, иҫ китмәле хеҙмәттәре лә Башҡортостанға әйләнеп ҡайтты. Вафатына байтаҡ йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, уның ғилми мираҫы төрки илдәрендә генә түгел, Европа фәнендә лә бик юғары баһалана. Төрки халыҡтарының мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергәне өсөн халыҡ-ара ТЮРКСОЙ ойошмаһы сиктәрендә 2010 йыл Әхмәтзәки Вәлиди Туған йылы тип иғлан ителде.

Әйткәндәй, Ташкентта Ә.-З. Вәлиди урамы булһа, Санкт-Петербург университетының Көнсығыш факультеты бинаһы алдында уның иҫтәлегенә бюст ҡуйылған. Быйыл башҡорт халҡының арҙаҡлы улының тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы БР Хөкүмәте планына ярашлы тантаналы саралар уҙғарыу ҡаралған. Сит ил ғалимдары ҡатнашлығында фәнни-ғәмәли конференция, тантаналы кисәләр, күргәҙмәләр менән бер рәттән, Өфө ҡалаһының элекке Матросов паркында Әхмәтзәки Вәлидигә һәйкәл ҡуйыласаҡ. Шулай уҡ Сибай ҡалаһының мәҙәниәт



һәм ял паркында ла уның бюсын ҡуйыу күҙаллана. Иншалла, халҡыбыҙҙың нисәмә йылдар буйы тик хыялында ғына йөрөткән ниәттәре бойомға аша бөгөн.

**Вәли ИҘРИСОВ ҡыуанды.**

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

*Көтөлмәгән шырлыҡтарға юлығып,*
*Урманыңда һинең, башҡорт теле,*
*Тертләп китәм,*
*Күптән онотолған*
*Моң алғандай йөрәгемде телеп.*

*Ҡойолоп төшөп ағас баштарынан,*
*Илгәҙәк нур уйнай ҡарашымда.*
*Аяҡ аҫтым - ҡыу япраҡтан ғына,*
*Йәш үҫенте - барса тарафымда...*

*И, азатлыҡ рухы, ирек моңо!*
*И, мөҡәддәс, ғәзиз боронғолоҡ!*
*Миһырбанлыҡ һиндә - иң бөйөк ғәм,*
*Ҡыр тибелер һиндә ҡырын холоҡ.*

*Һәр тере зат - йыһан сәғәҙәте,*
*Һәр бер бөжәк бында - шырлыҡ йәме.*
*Ҡарунлыҡтан, хөсөтлөктән азат*
*Кейек итеп үҙен тоя йәнем*
*Урманыңда һинең,*
*Башҡорт теле!*

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.**

ХӘҠИҠӘТ ЭҘЕНӘН

# КЕШЕЛӘР ДӨРӨҪ МӘҒЛҮМӘТ АЛҺЫН,

## йәки Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу Башҡортостан үҫешенең объектив картинаһын күрһәтәсәк




**Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек кампанияһы әүҙемләшә бара. Башҡортостан Республикаһы Президентының Дәүләт советнигы Сергей Николаевич Лаврентьев уны үткәреү барышында осраясаҡ ҡайһы бер көнүҙәк проблемалар хаҡында һөйләй.**

Халыҡ иҫәбен алыу - ғәҙәти, әйтергә кәрәк, элек-электән уҙғарыла килгән сара. Унда дәүләт власы органдарының бурысы иҫәп алып барыусылар эшен ойоштороуҙан һәм һуңынан һөҙөмтәләрҙе барлауҙан тора. Башҡортостан Республикаһында бер кем дә был кампанияны халыҡты дөйөм мобилизациялау сараһына әүерелдерергә йыйынмай. Беҙ демократик йәмғиәттә йәшәйбеҙ һәм һәр граждан үҙенең теге йәки был милләткә, социаль төркөмгә, дингә ҡарауын үҙ аллы, тормош тәжрибәһе нигеҙендә билдәләй ала. Беҙ кешеләрҙең үҙ ғаиләһе, тыуған төбәге тарихы хаҡында объектив, дөрөҫ мәғлүмәт алыуы яҡлыбыҙ. Бының менән компетентлы белгестәр - тарихсылар, демографтар, социологтар шөғөлләнергә тейеш.

Әммә шул уҡ ваҡытта хәлторошто үҙ мәнфәғәтендә файҙаланырға теләүсе, тыныс һәм ғәмәлдәге ҡағиҙәләр сиктәрендә хәл ителергә тейешле мәсьәләләрҙе сәйәси юҫыҡҡа йүнәлдереүсе көстәр барлығын да билдәләйбеҙ. **Ни өсөндөр Ҡаҙанда төрлө сәйәси лидереүҙәргә һәм акцияларға ойотко һалына.** Улар яһалма рәүештә халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы тирәһендә хәлде ҡатмарлаштыра. Ниндәйҙер проблема бар икән, уны һәр ваҡыт тыныс, эшлекле шарттарҙа, артыҡ мәшәҡәтһеҙ хәл итергә мөмкин.

Белемем һәм эшмәкәрлегем буйынса тарихсылар менән даими аралашам. Башҡортостан белгестәрен тыңлаһаң, улар әйтеүенсә, башҡорттар ассимиляцияға бирелә. Татар авторҙарын уҡыһаң, улар, республикала татарҙарҙы башҡорттар тип яҙалар, тип раҫлай. Бындай бәхәстәрҙе тиҫтә йыл буйы ишетмәйем, шуға күрә һуңғы йөҙ йыллыҡта тупланған мәҡәләләрҙән һәм сығанаҡтарҙан ентекле мәғлүмәт йыйырға тура килде.

Был мәсьәләгә асыҡлыҡ индерергә теләүселәргә иң тәүҙә XIX быуат материалдарын һәм сығанаҡтарын өйрәнеүҙән башларға тәҡдим итер инем. Этнос, милләт төшөнсәһе - оҙайлы эш, шуға ла һуңғы 100-150 йыл ғына уға үҙгәреш индерә алмай. Атап әйткәндә, Ырымбур һәм Өфө губерналарында ергә хужа булыу буйынса документтар һәм 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу материалдары ҡыҙыҡлы. Ул осорҙа "үҙ" милләтенең һанын арттырырға теләүсе "изге күңелле" кешеләр булмаған һәм халыҡ үҙенең туған телен бер ниндәй йоғонтоһоҙ үҙ аллы билдәләгән. Ул осорҙа Златоуст, Өфө, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй, Бөрө һәм Минзәлә өйәҙҙәре ингән бөтә Өфө губернаһы буйынса халыҡтың 41 проценты башҡорт, 8,4 проценты - татар, 1 проценты - мишәр һәм 1,8 проценты типтәр телдәрендә һөйләшкән. Ошо һандарҙы бергә ҡушайыҡ. Улар хәҙерге Башҡортостандағы башҡорттар менән татарҙарҙың йыйылма күрһәткесенә бик яҡын. **1897 йылда берәү ҙә кешеләрҙе үҙҙәрен башҡорттар, ә телен башҡорт теле тип иҫәпләргә мәжбүр итмәгән.**

**Йөҙ йыл элек кенә өйәҙ халҡының 32,4 процентын тәшкил иткән Минзәлә башҡорттары ҡайҙа булған, тигән урынлы һорау тыуа. Халыҡтың 53,8 проценты башҡортса һөйләшкән Бәләбәй өйәҙендә лә, халҡының 52,7 проценты башҡорт телен туған теле тип таныған Бөрө өйәҙендә лә ошондай уҡ хәл күҙәтелә.**

Шуға күрә бер генә иҫәп алыу кампанияһы материалдарына һылтаныусылар ысынбарлыҡты боҙоп күрһәтеүгә юл ҡуя. Хәлде үткәрелгән бөтә иҫәп алыу кампаниялары мәғлүмәттәрен файҙаланып баһаларға кәрәк.

Совет осоронда һәм Советтарҙан һуңғы йылдарҙа үткәрелгән иҫәп алыу һандарының динамикаһын ҡарайыҡ. 1926 йылда төбәк сиктәрен ҡайтанан булеү, Граждандар һуғышы, ҡоролоҡ, аслыҡ, йоғошло ауырыуҙар эҙемтәләре арҡаһында башҡорттар һанының ҡырҡа кәмеүе күҙәтелә. Арғаяш башҡорттарын иҫәпкә алмағанда (41 меңгә яҡын кеше), Автономиялы Башҡорт ССР-ында башҡорттар 22,8 процент, рустар - 40,3, татарҙар - 18,0, мишәрҙәр - 4,3, типтәрҙәр 0,9 процент тәшкил иткән.1939 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса БАССР-ҙағы 3158969 кешенең 21,2 процентын башҡорттар, 40,6 процентын -рустар, 24,6 процентын татарҙар тәшкил иткән. Татарҙар иҫәбенә мишәрҙәр һәм типтәрҙәрҙең күпселеге индерелгән. 1979 йылғы иҫәп алыу мәғлүмәттәре буйынса республикала татарҙар өлөшө 24,5 процент тәшкил иткән, 1989 йылғы мәғлүмәттәр буйынса ҡапыл 28,4 процентҡа еткән, ә 2002 йылда 1979 йылдағыса 24,1 процентҡа әйләнеп ҡайтҡан. Ә башҡорттар нисәү? 1979 йылда улар халыҡтың 24,3 процентын тәшкил иткән, 1989 йылда уларҙың өлөшө 21,9 процентҡа тиклем түбәнәйгән, ә 2002 йылда 29,8 процентҡа тиклем артҡан.

1989 йыл бөтә өлкәләрҙә һәм мөнәсәбәттәрҙә ғәйәт ҡатмарлы осор була. Ошо болғаныштар татар халҡында "ҡыҙыл ауыҙҙар" тип аталған төрлө буш боғаҙҙарҙың "ярҙамы" менән башҡорттарҙың, айырыуса көнбайыш башҡорттарының, үҙбилдәләнеше һөҙөмтәләренә йоғонто яһала. Унан һуңғы йылдарҙа республиканың үҙаллылыҡ шарттарында уңышлы үҫеше Башҡортостан граждандарының рухи тормошонда ла, республикала йәшәүсе бөтә халыҡтарҙың милли үҙаңын нығытыуҙа ла ҙур әһәмиәткә эйә булды. Башҡортостанда татарҙарҙың юҡҡа сығыуын берәү ҙә тоймай, улар бер яҡтан да ҡыйырһытылмаған. Тик татар теленә яҡын торған телдә һөйләшеүсе башҡорттар үҙ ырыуының, ауылының, атай-олатайҙарының үткәне менән ҡыҙыҡһына, үҙҙәренең төп башҡорт милли үҙаңына эйә була башланы.

Был йәһәттән беҙ Совет осорондағы халыҡта милли критерийҙарҙы юҡҡа сығарыу сәбәптәрен ентекле өйрәнергә тейешбеҙ.

Фекерҙәр бик күп. Бөгөн кеше татарса һөйләшә икән, тимәк, ул татар тигән дәлилде алға һөрәләр. Беләһегеҙме, башҡорт менән татар һөйләшендәге айырмалыҡтар рус менән белорус һөйләше араһындағыға ҡарағанда аҙыраҡ. Уралдан алып Волгаға тиклем барһағыҙ ҙа телдәр араһындағы айырмалыҡтарҙы тоймаҫһығыҙ. Әммә әҙәби тел һиҙелерлек айырыла. Мәҫәлән, Башҡортостанда татар милләтле бөтә кеше лә бындай "дөрөҫ" телдә әйтелгән фразаны тулыһынса аңламауы мөмкин. Шул уҡ ваҡытта Бөрйән диалекты нигеҙендә барлыҡҡа килгән башҡорт әҙәби теле лә айырыуса көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш башҡорттары өсөн билдәле бер ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

Тәү ҡарашҡа бигүк мөһим булмаған был күренеш башҡа факторҙар менән берлектә етди проблема барлыҡҡа килтерә. XIX быуат урталарына тиклем Волга буйы, Урал, Урта Азияның төрки мөхитендә сығатай теле яҙма әҙәби тел була. Рәсәйҙә капитализм үҫеү менән татарҙар төрки мөхиттә иң әүҙем мобиль өлөш булараҡ айырыла башлай. Рәсәй империяһының тулы хоҡуҡлы граждандары булыуҙарын һәм төрки донъяһында барлыҡҡа килгән бәйләнештәрен файҙаланып, улар әүҙем сауҙа итеү иҫәбенә үҙҙәренең иҡтисади ресурстарын йылдам арттыра. Белемле хеҙмәткәрҙәргә ихтыяж көсәйә башлай, яҙма мәҙәниәтте үҫтереү мөмкинлеге барлыҡҡа килә, мәсеттәр һәм мәҙрәсәләр төҙөлөшөнә иғәнәләр һаны арта. Һөҙөмтәлә татар теле иҫкерә барған сығатай телен ҡыҫырыҡлай башлай. **Башҡорт әҙәби теле XX быуаттың 30-сы йылдарында ғына формалаша. Шунда уҡ уны төҙөүселәр Сталин золомдары йоғонтоһона эләгә. Шуға күрә республикала әҙәби тел үҫеше ҙур ауырлыҡтарға осрай. Дөйөм мәғрифәтселеккә күсеү көнбайыш башҡорттары алдына ике юлдың береһен һайлау бурысын ҡуя: Ҡаҙан йәки Бөрйән телдәре нигеҙендә яҙма телдә ҡабул итеүгә ризалашыу. Большевиктарға халыҡты татар уҡытыусыларын йәлеп итеп төҙөлгән һәм күпләп сығарылған дәреслектәр нигеҙендә аң-белемгә йәлеп**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда йыл аҙағына тиклем бөтә медицина айныҡтыстары ябыласаҡ. Ҡарар РФ Эске эштәр министрлығын реформалаштырыуға һәм Президенттың милицияны уға хас булмаған функцияларҙан бушатыу тураһындағы Указына ярашлы ҡабул ителде. Әле республиканың 17 айныҡтысының бишәүһе ябылған, киләсәктә бындай учреждениеларҙы РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы ҡарамағына күсереү планлаштырыла.

✓Республиканың СПИД һәм инфекция ауырыуҙарына ҡаршы көрәш һәм профилактика үҙәгендә 7764 ВИЧ-инфекциялы иҫәптә тора. Шуларҙың 4870-е - ирҙәр, 2894-е ҡатын-ҡыҙҙар. Сирлеләрҙән дүрт меңдән ашыуы, йәғни 56 проценты -ҡалаларҙа, ике мең самаһы - 29,5 проценты ауылдарҙа йәшәй, ә мендән ашыуы холоҡ төҙәтеү урындарында теркәлгән, 57 ВИЧ-инфекциялы кешенең тәғәйен генә йәшәгән урыны юҡ.

✓2010 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу башланыу уңайы менән Салауат ҡалаһында Республика матбуғат байрамы уҙҙы. Унда гәзит-журналдар мөхәррирҙәренән башҡа БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ етәксеһе урынбаҫары Артур Иҙелбаев, Салауат ҡалаһы хакимиәте башлығы Радик Бохәрмәтов ҡатнашты.

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уңайы менән З.Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә яңы плакаттар баҫылып сыҡты. Тарихсы-ғалим Нияз Мәжитов "Башҡорт хандары, бейҙәре, солтандары шәжәрәләре" тигән исем аҫтында ике плакат әҙерләгән. Бөйөк Ватан һуғышы темаһына бәйле плакаттарҙа фронт күренештәре һәм тыл ауырлыҡтары һүрәтләнә. Әйткәндәй, 28 апрелдә нәшриәттең "Башҡорт китабы йорто"нда "Автограф көнө" ойоштороласаҡ. Осрашыуҙа яҙыусылар ҡатнаша, китаптарға ташламалар ҙа буласаҡ. Сара 12 сәғ. башлана.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры "Арлекин" Бөтә Рәсәй балалар фестивалендә ҡатнашасаҡ. Санкт-Петербургта үтәсәк сарала коллектив "Серле көршәк" исемле балалар спектаклен күрһәтәсәк. Финалға үткән алты театр араһынан Башҡортостандан башҡа Мәскәү, Санкт-Петербург, Яҡут Республикаһы, Омск театрҙары бар.

✔ ***М. Ш. Шәймиев үҙ ырыуы - Минзәлә өйәҙе башҡорттарынан ер арендаторҙары булған типтәрҙәр тарихы һүрәтләнгән шәжәрәһен яҡшы беләләр, тип ышанам.***



**итеү еңелерәк була.** Минзәлә, көнбайыш башҡорттарының иҡтисади һәм мәҙәни-административ үҙәге булараҡ, Татар АССР-ы ҙур үҙәккә әүерелә, тәүге уҡытыусылары татарса уҡыталар һәм һаҡланып ҡалған мәсеттәрҙә лә татарса белем бирәләр.

Этносәйәси хәлгә быныңниндәй йоғонто яһауын ошондай факт та сағылдыра ала. **1920 йылға яңы ғына ойошторолған ТАССР составына индерелгән Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙендә 156789 башҡорт иҫәпләнгән. Алты йылдан улар 1752 кешегә ҡалған. Был процесҡа бик күп факторҙар йоғонто яһаған, властарҙың көсләп тағылған ҡарары шуларҙың иң мөһиме була. Шуға күрә М. Ш. Шәймиевтең "Азатлыҡ" радиоһы аша яңғыраған татарҙарҙы көс менән башҡорт итеп яҙҙырыу хәүефе булыуы хаҡындағы позицияһы менән килешеү мөмкин түгел. Бында, киреһенсә, тиҫтәләрсә йылдар буйы команда-административ баш-баштаҡлыҡтан һуң милли үҙаң ремиссияһы тормошҡа ашырыла.**

М. Ш. Шәймиев үҙ ырыуы - Минзәлә өйәҙе башҡорттарынан ер арендаторҙары булған типтәрҙәр тарихы һүрәтләнгән шәжәрәһен яҡшы беләләр, тип ышанам. Ошо Минзәлә, шул иҫәптән Аҡтаныш башҡорттары быуындары атай-олатайҙары ғүмер иткән ауылдарҙа әле лә йәшәй.

Әммә шәжәрәләр әле генә подпольенан сыҡты һәм "шартлатыусы" материалдар булараҡ ҡаралмай. Үҙенең асылы буйынса улар ырыуҙарҙың тарихи йылъяҙмаһы булыу ғына түгел, шулай уҡ, иң мөһиме, башҡорттарҙа аҫаба ерҙәргә хоҡуҡтарҙы раҫлаусы документтар ролен дә башҡара. Был Совет власында идеологик яҡтан зарарлы тип иҫәпләнгән. Беренсенән, большевиктар Ватан тарихын үҙ ҡанундарына буйһондороп ҡайтанан яҙырға тырыша һәм уларға ярашлы булмаған сығанаҡтарҙың кәрәге ҡалмай. Икенсенән, ергә мөлкәт хоҡуҡтары тураһында хәтергә төшөрөүгә юл ҡуйырға ярамай.

Шуға күрә үҙҙәренең шәжәрәһе хаҡында белмәгән бер нисә быуын үҫә. Әле республикабыҙҙа беҙ үҙ ғаиләбеҙҙең тарихына ҡыҙыҡһыныуҙың артыуын билдәләйбеҙ. Өҫтәүенә, башҡорттарҙа ғына түгел. Шул уҡ шәжәрә байрамдары башҡа халыҡ вәкилдәрен дә атай-олатайҙарын хәтергә төшөрөргә мәжбүр итә. **Уҙған иҫәп алыу халыҡ аңында онотолған этник төркөмдәрҙең - мишәрҙәр, типтәрҙәр, крәшендәр, старообрядсыларҙың барлығын күрһәтте.** Кешеләр быны үҙ теләге менән һайлай. Атай-олатайҙары менән бәйләнешен ҡайтанан тергеҙә.

Үҙ теленә ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килә, үҙаң реанимациялана. Бындай процестар башҡа халыҡтарҙа ла күҙәтелә. Мәҫәлән, XVIII быуатта Австро-Венгрияла чех теле юҡҡа сығыу сигендә була. Чех милли мәҙәниәтен тергеҙеү, китап баҫыуҙы һәм чех телен таратыу даирәһен ҡайтанан барлыҡҡа килтереү өсөн 1873 йылға тиклем бер нисә быуындарҙың йөҙъйыллыҡ тырышлығы талап ителә. Әммә ошондай ҡатмарлы осорҙа ла чехтар, шул иҫәптән немец теленән башҡа телдәрҙе белмәгәндәр ҙә үҙаңын, үҙбилдәләнешен юғалтмай.

Әле башҡорт теле үҫкән һәм әүҙем ҡулланылған тарихи киңлек тергеҙелә. Бының өсөн бөтә шарттар булдырылған һәм тәбиғи процесты ауыр көрәшкә әйләндереүҙең кәрәге юҡ. Мәҙәни архетиптар, мәҙәни элита һаҡланып ҡала икән, милли үҙанды ла юҡҡа сығарыу мөмкин түгел.

**Нигеҙҙә русса һөйләшкән һәм русса фекер йөрөткән башҡорттарҙың булыуы берәүҙе лә ғәжәпләндермәй. Башҡорт ауылдарында йыш ҡына башҡортса һөйләшкән рустар йәшәй. Әммә уларҙың барыһы ла тотороҡло үҙаңға эйә. Ниңә татарса һөйләшкән һәр башҡортто йәки русты мотлаҡ татар тип яҙылырға тейешһегеҙ, тип өгөтләргә? Кешеләр тарихи тамырҙарын үҙҙәре билдәләйәсәгенә шигебеҙ юҡ.**

**Тормош үҙ ҡанундары буйынса бара, бер ниндәй ҙә ирекле һәм мәжбүри боҙоҡлоҡтар тарихтың юлын тамырынан үҙгәртә алмай. Яуаплы сәйәсмәндәр бөтә илебеҙ халыҡтары хаҡына барлыҡҡа килгән проблемаларҙы тыныс һәм конструктив хәл итеү мөмкинлеген табыр, тип ышанам.**

*ИҒТИБАР!*

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон, бөгөн-иртәгә 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора.**

## "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы дауам итә.

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

## Тағы бер тәҡдим бар…

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

## Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, ярты йылға 240 һум.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзаныраҡ: ярты йылға - 225 һум.
- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ ярты йылға 186 һум 60 тингә генә төшәсәк.

## Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ…

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ", - тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" - тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, ғәзиз милләттәштәр!**

## "Киске Өфө" сайтына рәхим итегеҙ!



Башҡорт телендәге аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенең интернетта үҙенең сайты бар: **www.kiskeufa.ru** Сайтҡа инеп, баҫманың һәр яңы һаны менән таныша, төрлө конкурстарыбыҙ тураһында мәғлүмәт ала алаһығыҙ. Меңәрләгән матбуғат баҫмалары баҙарында үҙ урыны, үҙ йөҙө, үҙ һүҙе менән айырылып торған "Киске Өфө" гәзитен уҡығыҙ, уның хаҡындағы мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге, бигерәк тә республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәргә лә еткерегеҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Яңауыл районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ БР Президенты Мортаза Рәхимов "Транснефтепродукт" акционерҙар йәмғиәте етәксеһе В. А. Шиманович менән эш осрашыуы үткәрҙе. В. А. Шиманович Президентты "Уралтранснефтепродукт" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең яңы генераль директоры Н. Й. Баһауетдинов менән таныштырҙы.

✔ БР дүртенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың егерме дүртенсе ултырышы булды. Уның эшендә БР Президенты ҡатнашты. Парламент ултырышының бер өлөшө Хөкүмәт уҡыуҙарына арналды. БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев депутаттарға Бөйөк Еңеү байрамына әҙерлек һәм Хөкүмәттең һуғыш, хеҙмәт һәм тыл ветерандарын социаль тәьмин итеү буйынса эшмәкәрлеге тураһында һөйләне.

✔ Башҡортостандың күп райондарында яҙғы баҫыу эштәре башланды. Республиканың 11 районында - ужым культуралары, 15 районда күп йыллыҡ үлән баҫыуҙары өҫтәмә туҡландырыла.

✔ Республикала киҫкен респиратор вируслы инфекция менән ауырыусылар һаны арта. Үткән аҙнала был сир менән 14789 кеше ауырыған. Баш ҡалала 4991 кешегә, шул иҫәптән 3624 балаға ошо диагноз ҡуйылған. Бер үк ваҡытта республикала "сусҡа киҙеүе"нә ҡаршы иммунизациялау дауам итә.

✔ 30 апрелдә "Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте һәм Башҡорт йәштәре иттифағы менән берлектә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған кисә үткәрелә. 18 сәғәттә башлана.

✔ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев республиканың айырым район башлыҡтары менән кәңәшмә үткәрҙе. Премьер-министр ауыл уҡытыусыларына торлаҡҡа һәм коммуналь түләүҙәргә компенсация бурыстарын биреүгә ҡағылышлы эштәрҙең тейешле кимәлдә булмауына юл ҡуймау тураһында ҡәтғи белдерҙе.

✔ Май байрамдарында 1,2,3 май һәм 8,9,10 май ял көндәре булып тора.

✔ Республикала "Парктар маршы - 2010" акцияһы башланды. Уның сиктәрендә урмандарҙы һәм посадкаларҙы һаҡлау, таҙартыу, ауыл-ҡалаларҙы йәшелләндереү буйынса саралар үткәреләсәк.

БАҠСА



# АПРЕЛДӘ... сәсеп өлгөр

**Ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән, ерҙе тәүге ямғырҙар бер аҙ туйындырып та өлгөрҙө. Апрелдә ер йылынып, өлгөрөп етә. Шуға ла яҡшы уңыш алыу өсөн күп баҡсасылар төрлө йәшелсәләрҙе тап ошо осрҙа сәсеп ҡалырға тырыша.**

Апрель айында баҡсаны төрлө сүп-сарҙан таҙартыу ҙа мөһим. Сүпте компост соҡорона һалырға, йә парниктарҙа һәм түтәлдәрҙә ерҙе йылытыусы ҡатлам итеп, ергә күмеп ҡалдырырға була. Бының өсөн түтәл өҫтөндәге 25-40 см ҡалынлығындағы ерҙе алып тороп, 10-15 см тәрәнлегендәге соҡорға сүпте тултырырға, өҫтөнә тиҙәк ҡатыштырылған һыу ҡойорға, һуңынан тупраҡ менән тигеҙләп ҡуйырға. Бындай түтәл тиҙерәк йылына, унда дым яҡшы һаҡлана.

Яҙ башында мотлаҡ раузаларҙы 6-8 бөрөһөн генә ҡалдырып, киҫеп сығырға кәрәк. Үрелеп үҫеүсе раузаларҙың иҫкергән йәки көсһеҙләнгән үҫентеләрен алып ташлау ҙа етә. Был ваҡытта виола, маргаритка, календула, космея һ.б. һыуыҡҡа сыҙамлы сәскәләрҙе сәсергә була. Иртә сәскә атыусы күп йыллыҡ сәскәләрҙең үҫентеләре шытып сыға башлағас та, уларҙы минераль туҡландырыу кәрәк булыр. Бының өсөн тупраҡты йомшартып, 1 кв.м иҫәбенә 30 г аммиак селитраһы, 20 г суперфосфат, 15 г калий тоҙон һыуҙа иретеп, үҫемлек тирәләй ҡойоп сығығыҙ.

Апрелдә емеш биреүсе ҡыуаҡтар һәм ағастарҙың ботаҡтарын ҡырҡығыҙ, уларҙы ҡортоҡостарҙан һаҡлау өсөн төрлө препараттар һибегеҙ, сәсәлә торған картуфты көн яҡтыһына сығарып һалырға онотмағыҙ. Апрель ағастарға прививка эшләү өсөн дә ҡулайлы мәл. Апрель башында уҡ кәбеҫтә үҫентеләре ултыртып ҡуймаһағыҙ, әле сәсергә лә ярай. Йәшелсә сәселәсәк түтәлдәрҙе бер нисә көнгә полиэтилен менән ҡаплап ҡуйһағыҙ, сүп-сар үләне тиҙ арала шытып сығыр. Был түтәлгә нимәлер сәсер алдынан ҡый үләндәрен утап сығығыҙ. Был осраҡта дым да яҡшыраҡ һаҡлана, сәселгән кишер йәки башҡа йәшелсә шытып сыҡкан ваҡытта сүп үләндәре лә йонсотмаясаҡ.

Май урталарында асыҡ һауаға ҡабаҡ сәсергә була. Еләк түтәлдәрен таҙартып, туҡландырыу ҙа кәрәк булыр. Апрель аҙағында кишер, петрушка, шалҡан, укроп, редис, һуған сәсегеҙ. Ай аҙағында ҡарағат ҡыуаҡтарын да артыҡ ботаҡтарҙан таҙартырға була.

Өйҙә сәселгән үҫентеләргә самалап һыу һибеп торорға һәм ҡояш нурҙарынан һаҡларға кәрәк.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ИЛДЕҢ КИЛӘСӘГЕ - ЙӘШТӘРҘӘ...

## Тик улар араһында һин бармы?

**Сығарылыш уҡыусыһы алдында торған хәл ителәһе мәсьәләләр бихисап бөгөн. Берҙәм дәүләт имтиханларын уңышлы тапшырыу ғына түгел, һөнәр, уҡыу йорто һайлау ҙа мөһим бурыстарҙың береһе. Ошоно иҫәпкә алып, яңыраҡ БР Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы сығарылыш уҡыусылары, студенттар, эшләп йөрөүсе йәштәр өсөн Асыҡ ишектәр көнө сиктәрендә "Тренингтар марафоны" үткәрҙе.**

Был уҡыу йорто баш ҡалала урынлашҡан башҡа юғары уҡыу йорттарынан ҡырҡа айырылып тора. 1993 йылда асылған белем биреү учреждениеһында республика өсөн дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәр әҙерләнә.

- Беҙҙең республикабыҙ оло бер дәүләт булып тора. Уның дәүләт органдары, министрлыҡтары, ҡала округтары һәм муниципаль берләшмәләре бар. Тимәк, был органдарҙа эшләү өсөн республикаға идара итеүсе кешеләр кәрәк, - тине академия ректоры Мансур Әнүәр улы Әйүпов сарага килеүселәр алдында сығыш яһап. - Рәсәй, әлбиттә, бөйөк, әммә бик ҡатмарлы дәүләт. Рәсәйҙә бары тик идара итеүселәр бар мәсьәләләрҙе хәл итә, ә ҡалғандар "өҫтән" ҡарар көтөп йәшәргә күнеккән. Шуға ла бөгөн бөтә кимәлдә социаль яҡтан яуаплы, белемле, илһөйәр етәкселәр әҙерләмәйенсә тороп, киләсәкте тәьмин итеп булмаясаҡ.

БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы янындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү дәүләт идаралығы ярҙамында ойошторолған был сарала БР Президенты Хакимиәте, БР Хөкүмәте аппараты, Мәғариф министрлығы, Өфө ҡала округы хакимиәте вәкилдәре менән берлектә эшкә урынлашыу һәм һөнәр һайлау мәсьәләләре тикшерелде, билдәле ғалимдар, етәкселәр, тренер-консультанттар, бизнес-тренерҙар ҡатнашлығында төрлө тренингтар үткәрелде. Бынан тыш, бында БР Президенты янындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһының 2010 йылға ҡабул итеү кампанияһы мәсьәләләре ҡаралды, академияның уҡытыусылар һәм профессорҙар составы менән танышырға, һөнәри тест үтергә, кәрәкле мәғлүмәт тупларға ла мөмкинлек булды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был уҡыу йортоноң республикаһының, милләтенең киләсәге өсөн борсолған, иртәгәһе көндө яҡтыраҡ һәм яҡшыраҡ итергә ынтылған йәш кеше өсөн ҙур мөмкинлектәр биреүен барыбыҙ ҙа яҡшы аңлайбыҙ. Әммә "Тренингтар марафонына" йыйылған йәштәр араһында башҡорт ҡыҙҙарының һәм егеттәренең аҙ булыуы хәүефләндерҙе. Әлбиттә, киләсәк йәштәр ҡулында ла ул, тик ул йәштәр араһында һинең булыуың да шарт бит әле. Был уҡыу йорто биргән һөнәр - һөнәр генә түгел, ә беҙҙең гражданлыҡ бурысыбыҙ икәнен дә онотмаһаҡ ине.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ВЕТЕРАНДАРҒА АСЫҠ ИШЕКТӘР КӨНӨ

**БР буйынса Теркәү, кадастр һәм картография федераль дәүләт хеҙмәте идаралығы Еңеүҙең 65 йыллығын байрам итеү менән бәйле ветерандарға бүләк әҙерләнә.**

14 апрелдән башлап идаралыҡта һәр шаршамбы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар һәм улар исеменән ышаныс ҡағыҙы менән мөрәжәғәт итеүселәргә Асыҡ ишектәр көнө үткәрелә. Был көндә идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре башҡаларҙы ҡабул итмәйәсәк. Акция сиктәрендә күсемһеҙ милек хоҡуғы дәүләт теркәүе тураһындағы ғаризаларҙы ҡарау - 7, ә Берҙәм дәүләт хоҡуҡ реестрынан мәғлүмәт биреү ваҡыты 2 көн ваҡытты аласаҡ. Ветерандар өсөн дәүләт хоҡуҡи теркәүе һәм дәүләт кадастр иҫәбе һорауҙары буйынса консультациялар уҙғарыла. Акцияның ваҡыты сикләнмәгән, улар Өфө ҡалаһының үҙәк аппараты һәм идаралыҡтың республикалағы башҡа ҡалалар һәм райондарҙа урынлашҡан территориаль бүлектәрендә үтә.

## ЙӘШТӘР - ХАТАҺЫҘ ҠАЛА ӨСӨН

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары һәм "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса ҡала комиссияһының терминология төркөмө Өфөлә "Йәштәр - хатаһыҙ ҡалаға!" тигән акция уҙғара.**

Акция Республика йылы һәм Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сиктәрендә үтә. Апрель айы тамамланғансы студенттар башҡорт һәм рус телдәрендәге алтаҡталар, күрһәткестәр, урам аншлагтарын, рекламаларҙы, лозунгыларҙы һәм башҡа күргәҙмә мәғлүмәттәрҙең дөрөҫ яҙылышын тикшерә. Әйткәндәй, БДПУ-ның Башҡорт теле хеҙмәте 2006 йылда ошондай уҡ акцияла ҡатнашып, "Хатаһыҙ ҡала" дөйөм ҡала конкурсында беренсе урынға лайыҡ булғайны.

## ТӘҮГЕ БАЛАЛАР ҠОРОЛТАЙЫ

**Өфөлә 28 апрелдә "Киләсәк беҙҙән башлана!" тигән девиз менән Беренсе ҡала балалар ҡоролтайы уҙасаҡ. Ул Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арнала һәм үҫеп килеүсе быуында илһөйәрлек тойғолары уятыу, уларҙың гражданлыҡ әүҙемлегенә булышлыҡ итеү маҡсатында үткәрелә.**

Ҡаланың белем биреү учреждениеларында балалар ҡоролтайына әҙерлек күптән башланған. 15 апрелгә тиклем делегаттар һайланған, ғаризалар ҡабул ителгән, ойоштороу комитеты 27 апрелгә тиклем авторлыҡ программаларын ҡараясаҡ. Балалар ҡоролтайы башҡорт телендә, пленар ултырыш рәүешендә үтәсәк, унда уҡытыусылар, йәштәр ойошмалары һәм ваҡытлы матбуғат саралары вәкилдәре лә ҡатнашасаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Республика наркология диспансеры баш врачы Илдар Байковтың мәктәп уҡыусылары араһында үткәрелгән наркотик һәм психотроп матдәләр ҡулланыуға тест һөҙөмтәләре тураһындағы мәғлүмәте тыңланды. Билдәләнеүенсә, 2 февралдән 4 мартҡа тиклем үткәрелгән был тест һынауҙарында 140 мәктәптән 17850 бала ҡатнашҡан. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡалала наркотиктарға ылығыусы балалар байтаҡ. Гөмүмән, бөгөн Республика наркология диспансерында Өфөнән 4512 наркоман иҫәптә тора. Былтыр ғына уларҙың һаны 222 кешегә артҡан.

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Ирек Ялалов билдәләүенсә, Еңеү көнө байрамы айҡанлы Еңеү паркында Таһир Күсимовтың һәм Минлеғәле Шайморатовтың бюсы ҡуйыласаҡ.

✓19 апрель мәғлүмәттәре буйынса баш ҡалала 2005 йылдың 1 мартынан һуң 151 һуғыш ветераны һәм һуғышта ҡатнашҡандарҙың 124 тол ҡатыны торлаҡҡа мохтаж булараҡ теркәлгән. Әле уларҙың 37-һенә торлаҡ алыуға таныҡлыҡ бирелгән. Ә 2005 йылдың 1 мартына тиклем иҫәптә торған ветерандарға һәм тол ҡалғандарға торлаҡ алыуға 176 субсидия бирелгән.

✓Тиҙҙән Өфөлә итальян партнерҙар менән хеҙмәттәшлек сиктәрендә шампан шарабы етештерелә башлаясаҡ. Заводты май аҙағында асыу көтөлә.

✓Өфө лимонарийында 2-3 айҙан тәүге банан уңышын йыймаҡсылар. Әлегә бында өс йыл элек килтерелгән япон кәрлә бананының емештәре бармаҡ ҙурлыҡҡа еткән. Баҡсасылар әйтеүенсә, тропик үҫемлектең был төрө үҙ "гүмерендә" тик бер тапҡыр ғына сәскә ата ла, емеш биргәс, һулый.

✓28 апрелдә 10 сәғәттә Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты ойошторолоуҙың 20 йыллығына арналған "Күп милләтле дәүләт шарттарында төп телдәрҙе, мәҙәниәтте һаҡлау һәм үҫтереү: проблемалар һәм перспективалар" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәрелә.

*АФАРИН!*

# ШАЯНДАР, ТАПҠЫРҘАР, ОТҠОРҘАР...

## тағы алышҡа сыҡты



**Шаяндар, тапҡырҙар, отҡорҙар уйыны - башҡорт сәхнәһендә ҙур билдәлелек яулап, йәштәрҙе көтөп алынған тамашаһына әүерелә бара. Мәктәп уҡыусылары араһында "Шаяниум" бәйгеһе инде күптән билдәле булһа, республика райондары йәштәре ассоциацияһы быйыл икенсе тапҡыр уҙғарҙы был күркәм тамашаны. Был юлы унда һигеҙ команда: Баймаҡтан - "Шаҡ-маҡ", Бөрйәндән - "Бурзой", Әбйәлилдән - "Ох, Әй", Ейәнсуранан - "Бытбылдыҡ", Учалынан - "Горняк дозор", Сибайҙан - "Сибай" һәм Мәләүездән - "Ипотека", Көйөргәҙенән "KZ" командалары көс һынашты.**

Шаяндар, тапҡырҙар һәм отҡорҙар уйынына һәр район командаһы ныҡлы әҙерләнеп килгәйне. Әбйәлилдәрҙең "Салауат батыр" йыры менән сығыш яһауы тамашасыға башҡорт рухы өҫтәнә, Баймаҡ егеттәренең "ат"та сабып сығыуы башҡорт ир-егеттәренең атһыҙ йәшәй алмауын күрһәтте. Әбйәлил йәштәре, һәр ваҡыттағыса, буш көлөү, мәрәкә менән генә сикләнеп ҡалманы, үҙҙәренең сығышында йәштәрҙе юмор аша айыҡ йәшәүгә әйҙәне, киләсәк беҙҙең ҡулда, тип ышандырҙы. Шаяндар, тапҡырҙар һәм отҡорҙар уйыны ябай һәм еңел булып тойолһа ла, унда ҡатнашыр өсөн зирәк булыу - тәүге шарт. Был йәһәттән башҡорт йәштәре үҙҙәрен һынатманы, уларҙың отҡор, сос, төрлө яҡтан мәғлүмәтле, белемле икәнлеге ошо уйын барышында күренде. Уйында быйыл Гран-при - Мәләүездең "Ипотека"һына, I урын - баймаҡтарға, II урын - әбйәлилдәргә, III урын Сибай командаһына бирелде.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Илнур НУРҒӘЛИЕВ, "Ипотека" командаһы капитаны:** Командала дүрт егет: Нияз Сәғитов, Морат Иманғолов, Артур Булатов һәм мин уйнайбыҙ. Сығышыбыҙ менән бөтәбеҙ ҙә Мәләүез ҡалаһынан, Өфө ҡалаһының юғары уҡыу йорттарында белем алабыҙ. "Ипотека" командаһында бергә сығыш яһауыбыҙ беҙҙе дуҫлаштырҙы. КВН - ул ауыр ғына жанр, уны хатта ниндәйҙер кимәлдә интеллектуаль цирк менән дә сағыштырырға була. Сәхнәгә ҡуйыр өсөн мәҙәктәрҙе уйлап сығарыуы еңел түгел, сөнки һинең әйтергә теләгәнеңде тамашасының аңлауы, ҡабул итеүе мөһим. Сығыштарыбыҙҙы тамашасы яратып, ихлас ҡул сабып көтөп ала, ҙур алҡыштар менән оҙатып ҡала икән, тимәк, улар беҙҙе ярата, аңлай. Шаяндар, тапҡырҙар, отҡорҙар уйынында һәр теләгән кеше ҡатнаша алмай, сөнки тамашасыны көлдөрөр, һинең сығыштарыңды яратып ҡабул иттерер өсөн иң беренсе үҙеңә лә йор һүҙле, шаян, төртмә телле булырға кәрәк. Беҙ бөтәбеҙ ҙә тормошта шундай кешеләр, ауыр хәлдәрҙе лә көлөп үткәреп ебәрәбеҙ. Көлкө аша башҡаларға ла тормошто нисек бар, шулай ҡабул итергә, ауыр хәлдәрҙә бөгөлөп төшмәҫкә, һәр бер хәлдән еңел сыға белергә өйрәтәбеҙ.

**Илнур ҠОТЛӘХМӘТОВ, Башҡортостан Республикаһы йәштәренең яҡташтар ойошмалары ассоциацияһы рәйесе:** Беҙ ойошторған шаяндар, тапҡырҙар һәм отҡорҙар уйынына ҡатнашырға былтыр ете генә команда килһә, быйыл уларҙың һаны ике тапҡырға артыуы йәштәрҙең әүҙемләшеүе тураһында һөйләй. Былтыр беҙ был уйынды тәүге тапҡыр уҙғарғанға күрә, етешһеҙлектәребеҙ, уйлап еткермәгән нәмәләр күп булғайны. Быйыл журналистар, тамашасылар, жюри яһаған иҫкәрмәләргә ҡолаҡ һалырға, хаталарҙы төҙәтергә тырыштыҡ. Йәштәр араһында ойошҡанлыҡ артҡаны күҙгә күренеп һиҙелде. Көйәрмәндәр ҙә күп булды: һәр кем үҙ командаһы өсөн көйҙө-янды. Һайлап алыу турынан яңы ғына барлыҡҡа килгән яҡташтар ойошмаһы командалары финалға сыҡты. Мәҫәлән, Көйөргәҙе районының "KZ" командаһын әйтеп үтергә кәрәк: улар тәүге тапҡыр сығыш яһаһа ла, бирешеп ҡалманы. Был йәһәттән уларға "Афарин!" тиергә ҡала. Ғөмүмән, беҙҙең йәштәр ассоциацияһына әүҙем, дәртле, уңған йәштәр йыйылған. Бөтәһе лә үҙенең районы өсөн янып-көйөп йөрөй. Илһөйәрҙәр. Бөтә сараларҙа ла үҙ теләктәре менән әүҙем ҡатнашалар.

**Иҙел АРАЛБАЕВ, "Шаҡ-маҡ" командаһы капитаны:** Шаяндар, тапҡырҙар һәм отҡорҙар уйынында тәүге тапҡыр ҡатнаштым. "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһына лайыҡ булдым. Мин сәхнәлә ниндәймен - тормошта ла шундаймын. Иптәштәрем миңә: "Һиңә рәхәт, көлөп тик йөрөйһөң, ҡайғыра ла белмәйһең", - тиҙәр. Ысынлап та, көлөп йәшәүҙәре рәхәт ул. КВН уйынында ла тормошсан юмор күрһәтеп, көлкө аша тамашасыға әйтер һүҙҙәребеҙҙе еткерҙек. Әбйәлилдә ер һатылыуын, йәштәрҙең эскелеккә бирелеүен күрһәткән мәҙәктәрҙе был проблеманың ни тиклем киҫкен икәнен аңлаған кеше көлөп түгел, киреһенсә, йөрәге әрнеп ҡарай. Шуның кеүек халҡыбыҙға янаған проблемаларҙы юмор аша сағылдырып, йәштәрҙе уятып, уларға был хәлдәрҙән сығыу юлдарын күрһәтеп булалыр, тип уйлайым. Шуға күрә сығыштарыбыҙҙа еңел-еллелек булдырмаҫҡа тырыштыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шаяндар, тапҡырҙар, отҡорҙар уйыны нигеҙендә юмор бөйөклөгө ята, уйынсылар тамашасыларҙы көлдөрөп, күңелдәрен аса. Мәрәкәһеҙ, юморһыҙ, шаяртыуһыҙ был уйынды күҙ алдына ла килтереп булмай. Тик шуныһы: шаяндар һәм тапҡырҙар уйыны республикала киң билдәлелек яулаһа ла, көлкө фестивалендә ҡатнашырға теләүселәр һаны артһа ла, сәхнәгә сығарылған мәҙәктәрҙең барыһын да сифатлы тип әйтеп булмай. Киләсәктә ҡатнашыусы йәштәребеҙ уйланыр, мәҙәктәрҙең мәғәнәүи йөкмәткеһенә игтибар итер, тигән өмөттәбеҙ.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## РӨХСӘТҺЕҘ ЭШЛӘМӘ

**Фатирымда ремонт яһарға уйлайбыҙ. Зал бүлмәһен, уны эргәһендәге бүлмә менән берләштереп, иркенәйтергә ине иҫәп. Ҡайҙан, ниндәй рөхсәт кәрәк уның өсөн?**

- Был турала алдан уйлап, дөрөҫ эшләйһегеҙ, сөнки фатирҙарын үҙ белдектәре менән ҡайтанан планлаштырыусылар административ яуаплылыҡҡа тарттырылып, уларҙан байтаҡ ҡына күләмдә штраф түләтелеүе ихтимал. Шундай күңелһеҙлектәр килеп тыумаһын, тиһәгеҙ, ҡайтанан планлаштырыу менән бәйле ремонт яһау өсөн ремонт-төҙөлөш эштәренә төрлө инстанциянан рөхсәт алыу мотлаҡ.

Законда ремонттың ике рәсми төшөнсәһе бар: ҡайтанан планлаштырыу һәм үҙгәртеп ҡороу. Тәүгеһе торлаҡтың формаһына (конфигурацияһы) ниндәй ҙә булһа үҙгәреш индереү, был бинаның техник паспортына ла индерелергә тейеш. Икенсеһе - коммуникацияларҙы алыштырыу һәм ҡуйыу. Мәҫәлән, аш бүлмәһендәге плитәне, раковина, унитаз йә ваннаны икенсе урынға күсереп ултыртыу.

Ҡайтанан планлаштырыу бүлмәләр араһындағы стенаны емереү, йәки уны икенсе урында төҙөү, бүлмәләрҙе берләштереү йәки бүлеү, ишек уйымдарын күсереү, кондиционер ҡуйыу кеүек эштәрҙән хасил һәм ул ҡатмарлы эш һанала, ә лоджияларға тәҙрә ҡуйыу, стенаға уйып эшләнгән шкафтарҙы һүтеү, иҙәндәрҙе йылытыу ябай эштәр иҫәбенә инә. Был ике осраҡта ла төрлө инстанциянан рөхсәт алыу кәрәк. Өҫтәүенә, ҡатмарлы эштәргә проект төҙәлөләргә тейеш, уның менән махсус лицензиялы бюро хеҙмәткәрҙәре шөғөлләнә. Проект әҙер булғас, документтар (БТИ, ДЕЗ, СЭС, ГПН) туплай башларға мөмкин. Бынан тыш, күршеләр менән дә һөйләшеп, килешеү мотлаҡ. Документтар йыйып йөрөргә ваҡыт булмаған хәлдә, бының менән шөғөлләнеүсе махсус фирма түләүле хеҙмәт күрһәтә ала.

Түбәндәге эштәргә рөхсәт кәрәк:

- кондиционер ҡуйыу, стенаны һүтеү, бүлмә-ара ишектәрҙе монтажлау, санузелды берләштереү, ваннаны джакузиға алмаштырыу, камин ҡуйыу, унитаз йәки газ плитәһен күсереү һ.б.

## ЗАКОНҒА ТАЯНЫҒЫҘ

**Ҡыҙым балалар баҡсаһында - 1,5 ставкаға, ә икенсе баҡсала 0,5 ставкаға музыка уҡытыусыһы булып эшләй. Ауырып, уга больничныйҙа булырға тура килгәйне. Тәүге учреждение уга больничный өсөн түләне, ә икенсеһе түләүҙән баш тарта. Улар дөрөҫ эшләйме?**

Юҡ, был дөрөҫ түгел. Эшләгән урындары һанына ҡарамайынса, һәр бер эш урынынан больничный тулы күләмдә түләнергә тейеш. Хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ өсөн пособие күләме дөйөм эш стажынан сығып түләнә һәм ул 18720 һумдан артырға тейеш түгел.

Шулай итеп, больничный өсөн түләүҙе яҙма рәүештә талап итеп, икенсе эшләгән урынға хаҡлы мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Ғаризағыҙҙа "Хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса мотлаҡ социаль страховкаланыусы граждандарҙы пособие менән тәьмин итеү тураһында" Федераль закондың тейешле статьяһына таянып эш итегеҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Лимон аша

Ҡан баҫымы күтәрелһә, көн дә әҙләп ҡабығы менән лимон, әфлисун ашарға кәрәк.

### Яҙғы тымау

Яҙғы һары һыу башланһа, тымау йышая. Унан ҡотолоу өсөн үксәләрҙе төйөлгән һарымһаҡ менән ышҡырға кәрәк. Танау эсен, тамаҡты 3-4 мәртәбә тоҙло һыу менән сайҡау ҙа файҙалы.

### Ҡурай һәм ҡайын еләге

Һалҡын тейгәндә, бөйөр, бауыр, үт юлдары ауыртҡанда, быуындарға тоҙ ултырһа, ҡан баҫымы күтәрелгәндә шул емештәрҙе ашарға кәрәк. Ә бөйөрҙә, бауырҙа таш булһа, ҡурай һәм ҡайын еләге япраҡтарынан төнәтмә яһап эсәһең, сәйгә ҡушырға ла була.

### Таш боҫона ултырыу

Йылғанан алынған ташты тәрәнерәк тимер һауытта уртасараҡ ҡыҙҙырырға һәм өҫтөнә яйлап, әҙләп кенә һыу һибергә, шуның боҫона юрған ябынып ултырырға. Һалҡын тейгәндә, теш һыҙлағанда файҙалы. Таш өҫтөнә мәтрүшкә, кейәү үләне һалырға ла була.

### Ҡурылдай

Был сир яҙын үҙен нығыраҡ һиҙҙерә. Уны көсәйтмәҫ өсөн 1 ҡалаҡ кипкән туҡранбашты (клевер) 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә һәм көнөнә 3-4 мәртәбә сирек стакан эсергә.

### Балтырған

Балтырған япрағынан, тамырынан эшләнгән төнәтмә гастриттан, колиттан, дизентериянан дауалай. 1 ҡалаҡ кипкән тамырҙы ваҡлап, 1 стакан һалҡын һыуҙа өҫтөн ябып, 7-8 сәғәт тотаһың. Һөҙөп, ашар алдынан 30 минут алда көнөнә 3-4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсәһең.

### Әрекмән (репейник) мөғжизәһе

Гангренанан ҡотолоу өсөн иртәкис 3-4 япраҡты ҡайнар һыуға тығып алаһың да, гангреналы урынға ябып, полиэтилен менән урайһың. Файҙаһы 2-3 көндән беленә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Мәктәп ҡағиҙәләре

● Китап, ҡағыҙ һәм башҡа яҙыу әсбаптарығыҙҙы таҙа тотоғоҙ. Ҡәләмегеҙҙе кейемегеҙгә һәм сәстәрегеҙгә һөртмәгеҙ һәм ауыҙығыҙға ҡапмағыҙ. Бындай нәмәләр, беренсенән, әҙәпкә ҡаршы, икенсенән - ауырыуға сәбәп. Бармаҡтарығыҙҙы бысратмағыҙ. Көтмәгәндә бысранһа, һыу һәм һабын менән яҡшылап йыуығыҙ.

● Мәктәптә уйнарға рөхсәт бирелһә, әҙәпле булығыҙ. Уйнар өсөн яҡшы һауалы урындарҙы эҙләгеҙ. Бысраҡ урындарҙа, туҙан һәм балсыҡ араһында уйнамағыҙ. Сөнки бындай нәмәләрҙән әҙәм балаһына ауырыу йоға.

● Мәктәпкә барғанда һәм ҡайтҡанда тәрбиәһеҙ ҡыҙҙар менән йөрөмәгеҙ. Кибет алдында һәм башҡа ҡыҙыҡлы урындарҙа ҡарап тормағыҙ. Оло кешеләр кеүек төптөҙ йөрөгөҙ.

● Өйгә ҡайтып кергәс, ата-әсәләрегеҙ менән иҫәнләшегеҙ. Ҡулдарын үбегеҙ. Бынан һуң китап һәм яҙыу әйберҙәрегеҙҙе билдәле урынға ҡуйығыҙ. Кейемдәрегеҙҙе урынына урынлаштырығыҙ.

● Әгәр атайығыҙ йәки башҡа ололар һәм хөрмәтле ҡунаҡтар дәрестәрегеҙҙе уҡытып ҡарамаҡсы булһалар, һис наҙланмағыҙ, ҡарышмағыҙ. Ҡушҡандарын һәм теләктәрен рәхәтләнеп үтәгеҙ.

### Мөғәллимәләр өсөн ҡағиҙә

● Һеҙҙе гүзәл һәм аҡыллы кешеләр булһын тип тәрбиә итеүсе мөғәллимәләрегеҙҙе ололағыҙ. Нәсихәттәрен еренә еткереп үтәргә тырышығыҙ. Һүҙҙәренә ҡаршы килмәгеҙ. Уларҙы әсәләрегеҙ кеүек күрегеҙ. Әсәләрегеҙ дәрәжәһендә һөйөгөҙ. Улар алдында әҙәпле булығыҙ. Һәр әйткәндәрен ихлас тыңлағыҙ.

● Дәрес ваҡытында ҡул һәм аяҡтарығыҙ менән уйнамағыҙ. Сит яҡҡа ҡарап ултырмағыҙ. Янығыҙҙа булғандар менән уйнамағыҙ, һөйләшмәгеҙ. Дәрестә кәрәкмәгән китаптарҙы аҡтармағыҙ.

● Мөғәллимәгеҙ һорау бирһә, тура ҡарап тороғоҙ, ҡулдарығыҙҙы күкрәгегеҙгә ҡуйығыҙ, нимә хаҡында һорағанын яҡшы аңлағыҙ һәм белгән яуапты асыҡ тауыш менән әйтегеҙ. Иғтибар менән һөйләгеҙ.

● Белмәгән һүҙҙәр һәм аңлашылмай ҡалған дәрестәр булһа, мөғәллимәнән әҙәпле генә һорағыҙ. Дәрес ваҡытында башҡа нәмәләргә ҡарап зиһенегеҙҙе ебәрмәгеҙ.

● Мөғәллимәләр менән әрләшмәгеҙ. Уларҙың файҙалы нәсихәттәре менән ғәмәл итегеҙ. Тәрбиәле һәм гүзәл холоҡло кеше булырға тырышығыҙ.

### Иптәштәр ҡағиҙәһе

● Мәктәптәге иптәштәрегеҙ менән инсафлы булығыҙ. Уларҙы туғандарығыҙ кеүек күрегеҙ. Әҙәпле һөйләшегеҙ. Уларҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршылағыҙ. Хәсрәттәрен һәм шатлыҡтарын уртаҡлашығыҙ. Кәмселектәренә күҙ йомоғоҙ.

● Әҙәпһеҙ һәм боҙоҡ холоҡтары күренә башлаған иптәштәрегеҙҙән сафлыҡ менән айырылығыҙ һәм башҡа уларға ҡушылмағыҙ.

(Дауамы бар).

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ТУПРАҠ БАШҠОРТ БӘХЕТЕЛЕР,

## йәки Ер тигән тәхеттең хужаһы булайыҡ



**Уҙған аҙнала III Бөтөн донъя ҡоролтайына арналған саралар планына ярашлы, "Башҡортостан Республикаһының яңы иҡтисади үҫеше шарттарында ер менән файҙаланыу проблемалары" тигән түңәрәк ҡор уҙғарылды. Ошо мәртәбәле ҡорҙо ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ағзаһы Динир Әхмәтйәнов алып барҙы, ә фекер алышыуҙа БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Илдар Әминев, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы Секретариатының мониторинг, системалаштырыу һәм кодификация бүлеге мөдире Шамил Мөхәмәтдинов, БР фәндәр академияһының Ижтимағи-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшеренеүҙәр институты директоры Рим Вәлиәхмәтов, ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ағзаһы Иршат Аҫылғужин, Мәсетле районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Закирйән Ғатауллин, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Зифҡәт Сәйетғәлиев һәм башҡа белгестәр ҡатнашты.**

Башҡорт халҡының үҙ теленә, диненә һәм төйәк иткән еренә мөнәсәбәте унық булмышында, донъяға ҡарашында, йәшәйеш ҡанундарында асыҡтан-асыҡ сағыла. Күп быуаттар дауамында һаҡлана килгән аҫабалыҡ хоҡуғы Уралға һәм уның тирәләй йәйрәп ятҡан икһеҙ-сикһеҙ ерҙәргә хужа булған башҡорт халҡының азат һәм бойондороҡһоҙ рухын һаҡлаусы фактор булыуына шик юҡ. Тап шуның өсөн үҙ еренән мәхрүм ҡалған милләттәштәребеҙ төшөнкөлөк һәм фәҡирлек ҡапҡанына эләгә лә инде. Заман менән бергә тарих та үҙгәреп тора, әммә уның ҡабатланған мәлдәрендә элекке хаталар замандаштарыбыҙға һабаҡ булһын ине. Бөгөн ергә хоҡуҡ мәсьәләһе яңынан халҡыбыҙ киләсәген билдәләүсе иң әһәмиәтле проблемаларҙың береһенә әйләнде.

Сәйәси һәм иҡтисади үҙгәрештәр ауылдарҙа көн итеүсе ватандаштарыбыҙға элегерәк төшөбөҙгә лә инеп сыҡмаған мөмкинлек - билдәле сиктәрҙә ер биләү, уның ысын хужаһы булыу хоҡуғын бирҙе. Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе хосусилаштырыу ауыл халҡын ысын мәғәнәһендә ерле халыҡ, тип нарыҡларға нигеҙ бирә. Был процесс Рәсәй Федерацияһы субъекттарында уҙған быуаттың 90-сы йылдарында уҡ башҡарылһа ла, ерҙе хосусилаштырыу буйынса тейешле хоҡуҡи-норматив база булмауы сәбәпле, Башҡортостанда ул 2006 йылда ғына ғәмәлгә ашырыла башланы. Әлбиттә, был башҡа төбәктәрҙә күҙәтелгән етешһеҙлектәрҙе булдырмау, ауыл хужалығын байтаҡ ҡына ваҡыт арауығында билдәле бер кимәлдә тамам тарҡалыуҙан һаҡлап ҡалыу йәһәтенән бик уңайлы булды. Әммә ерҙе хосусилаштырыуҙы бик оҙаҡҡа һуҙыуҙың ауыл хужалығын заманса үҙгәртеп ҡороу, яңы иҡтисади мөмөкинлектәрҙе файҙаланыу өсөн үтеп сыға алмаҫлыҡ кәртә булыуы ла билдәле. Тап шуның арҡаһында файҙаланылмай ятҡан ауыл хужалығы ерҙәре самаһыҙ күбәйеп китте.

Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты тарафынан ойошторолған әлеге түңәрәк ҡорҙа ауыл хужалығы ерҙәрен хосусилаштырыу барышы һәм ер менән файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелеген күтәреү буйынса көнүҙәк мәсьәләләр буйынса байтаҡ тәнҡит һүҙҙәре һәм эшлекле тәҡдимдәр яңғыраны. Дәүләт ер иҫәбе мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостан Республикаһының ер фонды 14 миллион 294,7 мең гектар тәшкил итә, шуның 7 миллион 730, 5 мең гектары, йәғни 54,1 проценты ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә ҡарай. БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығында тупланған мәғлүмәт буйынса 2010 йылдың 1 апреленә республикабыҙҙың 982 ауыл хужалығы ойошмаһында, йәиһә ауыл биләмәләрендә бөтәһе 350 006 кешегә ер өлөшө (пайы) алыу хоҡуғы бирелеп, хосусила-

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Илдар ӘМИНЕВ, БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары:**

Рәсәй Федерацияһында 1992-1994 йылдарҙа ер реформаһы барышында 12 миллион гражданға 115 миллион гектар ауыл хужалығы ерҙәре дөйөм милектәге ер пайҙары рәүешендә бүлеп бирелгәйне. Ер массивтарының да, граждандарға тәғәйенләнгән ер өлөштәренең дә сиктәре билдәләнмәүе арҡаһында әлегә тиклем ошо ерҙәр тулыһынса кадастр иҫәбенә индерелмәгән, ә был пайсыларҙың ер участкаларына хоҡуғын дәүләт теркәүенә ҡуйыуҙы тотҡарлай. Һөҙөмтәлә әлегә тиклем 12 миллион ер милеге хужаһының 1,4 миллионы ғына үҙ ерҙәренә дәүләт теркәүе үткәреп, законлы рәүештә файҙаланыу хоҡуғы алды.

Беҙҙә эштәр башҡасараҡ тора. Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе хосусилаштырыу республикабыҙҙа бының өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылғас, 2006 йылда ғына башланып, әлеге көнгә уның беренсе этабы тамамланып килә. Росреестрҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында граждандарҙың ер участкаларына хоҡуғын теркәү дауам итә. 2010 йылдың 1 апреленә был эш 939 ауыл хужалығы ойошмаһында һәм ауыл биләмәһендә алып барыла. Бөгөнгә республика буйынса 265 575 кеше, йәғни барлыҡ пайсыларҙың 73,3 проценты ергә хоҡуғы теркәлгән таныҡлыҡ алған. Саҡмағош, Благовещен райондарында был эш тулыһынса тамамланһа, Дыуан, Күгәрсен, Көйөргәҙе һәм Шишмә райондарында 90 процентҡа етеп, тамамланыуға табан бара.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, республика буйынса 41 ойошмала граждандарҙың ер участкаһына хоҡуғын теркәү бөтөнләйгә башланмаған. Бөрө районында - 8 хужалыҡ, Бүздәктә - 7, Балаҡатайҙа - 4, Архангель, Йәрмәкәй, Миәкә, Салауат райондарында - 2-шәр, Илеш, Кушнаренко, Өфө һәм Федоровка райондарында берәр ойошма ошо йәһәттән һүлпәнлек күрһәтә. Уларҙың киләсәктәни көтөүен әйтеп аңлатырлыҡ та түгел. Ә Дәүләкән районында 9 хужалыҡ буйынса өлөшләтә дөйөм милеккә тәғәйенләнгән ерҙәр әлегә тиклем кадастр иҫәбенә индереп бөтөрөлмәгән. Йәрмәкәй районының 2 хужалығы үҙ ирке менән үҙҙәренең ер участкаһына хоҡуғын теркәүҙән рәсми рәүештә баш тартҡан.

Ер участкаларына милек хоҡуғын теркәүҙең оҙаҡҡа һуҙылыуы ауыл хужалығы ерҙәрен һөҙөмтәле файҙаланыу йәһәтенән тотҡарлыҡ тыуҙыра. Был ауыл халҡына ла, урындағы үҙидара һәм дәүләт органдарына ер менән иркен эш итеүгә кәртә булып, килем алыу мөмкинлектәрен кәметә. Әгәр бер хужалыҡта өлөшләтә дөйөм милек иҫәбенән ер пайы алған граждандарҙың барыһы ла үҙ хоҡуғын юридик яҡтан теркәмәһә, һәр кем үҙенә тейешле аныҡ ер участкаһын бүлеп тә ала алмай, ерҙе ҡуртымға биреп тә, һатып та, башҡа төрлө файҙаланып та булмай. Бындай мәсьәләләр айырым хужалыҡта ер хоҡуғы теркәлеү тулыһынса тамамланғас пайсыларҙың дөйөм йыйылышында хәл ителә. Әгәр ҙә граждандар 3 йыл дауамында үҙҙәренең ер участкаһына хоҡуғын теркәмәһә, был ерҙәр уларға кәрәкмәгәнгә иҫәпләнеп, дәүләт йәки муниципаль милеккә күсереләсәк.

Рәсәйҙең ер ҡануниәтенә ярашлы, ер мәсьәләләренең дөрөҫ хәл ителеүен тәьмин итеү маҡсатында дәүләт, муниципаль, производство һәм йәмәғәт ер контроле булдырыу ҡаралған. Беҙҙә әлегә йәмәғәт ойошмаларының ерҙәребеҙҙе файҙаланыу өлкәһендә махсус контроль алып барыу менән шөғөлләнгәне юҡ. Ер мәсьәләләрен хәл иткәндә урындағы халыҡтың мәнфәғәттәрен күҙәтеүҙе йәмәғәт ойошмаларынан да һөҙөмтәлерәк ойоштороусы башҡа органды табыуы ҡыйын. Шулай булғас, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты һәм уның төбәк ойошмалары ошо мәсьәлә буйынса ла бик файҙалы эштәр башҡара алыр ине.

**✓ Уның: "Тупраҡ китһә, һау бул, донъя, өҙөлмәктер самабыҙ", - тиеүе лә бөгөнгө ватандаштарыбыҙға хәүефле киҫәтеү булып яңғыраған кеүек. Ер-тәхетебеҙҙе сит-яттар ҡулына үҙ теләгебеҙ менән бирмәнәк ине.**

штырыла торған ерҙәрҙең дөйөм майҙаны 2 277 248 гектар тәшкил итте.

Законға ярашлы, 2010 йылдың 1 ғинуарынан граждандарға ер пайҙары биреү тамамланды. Әммә был ерҙе хосусилаштырыуҙың тамамланыуын аңлатмай әле. Әлеге көнгә барлығы 256 575 кеше генә Башҡортостан Республикаһы буйынса Федераль регистрация хеҙмәте идаралығы аша үҙенең ер өлөшөнә хоҡуғы булыуы теркәлгән таныҡлыҡ алған. Республика буйынса 982 ауыл хужалығы ойошмаһының һәм ауыл биләмәһенең 210-ында ғына милек хоҡуғын теркәү тулыһынса тамамланған. Түнәрәк ҡорҙа сығыш яһаусылар был өлкәлә әүҙемлек етмәүен урындағы хакимиәттәрҙең халыҡ менән тығыҙ эш алып бармауында күрҙе. Хосусилаштырылған ерҙәр менән артабан закон нигеҙендә иркен файҙаланыу өсөн ер пайына хоҡуғы булғандарҙың барыһының да теркәү процедураһын үтеп, махсус таныҡлыҡ алыуы мотлаҡ. Был эште лә һуҙһаҡ, йөҙәрләгән мең гектар майҙандағы ерҙәребеҙҙең бер файҙаһыҙ эшкәртелмәй ятыуы дауам итәсәк.

Түнәрәк ҡорҙа тағы ла бер мөһим мәсьәлә - ер пайы алған кешеләрҙең хосусилаштырылған дөйөм ер иҫәбенән үҙҙәренә тейешле ер участкаһын бүлеп алыу мөмкинлеге тураһында етди фекер алышыу булды. Ҡорҙа ҡатнашыусы белгестәр ошо мәсьәләне тиҙ арала хәл итеү өсөн аныҡ юридик механизм булмауы, ерҙе межалау эштәрен башҡарыу һәм кадастр иҫәбенә ҡуйыу өсөн түләүҙең ауыл кешеһе өсөн үтә ҡиммәт булыуы һәм башҡа ҡаршылыҡтар тураһында лә әйтеп үтте. Ни эшләптер, ошо хаҡта һүҙ сыҡһа, айырым шәхестәргә йәки үҙ-ара килешеү нигеҙендә берләшкән төркөмгә ер участкаларын бүлеп биреү ошондай участкаының майҙаны 50 гектарҙан кәм булмағанда ғына (Башҡортостанда бүлеп бирелә торған аныҡ ер участкаһы майҙаның минималь күләме шулай) ынғай хәл ителәсәк, тип фекер йөрөтәләр. Әммә бында үтеп сыҡмаҫлыҡ бер ҡаршылыҡ та юҡ: "Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр әйләнеше тураһында"ғы Федераль законда аныҡ бүлеп бирелә торған ер участкаларының РФ субъекты билдәләгән минималь күләмдән кәмерәк була алыуын билдәләгән норматив положение бар. Шуға күрә беҙҙә лә айырым ер участкаһын бүлеп алыу өсөн ер пайы (пайҙары) майҙанының кәмендә 50 гектар булыуы һәр осраҡта ла мотлаҡ түгел. Үрҙә күрһәтелгән законға ярашлы (4-се статья, 1-се пункттың 4-се өлөшө), әгәр шәхси ярҙамсы хужалыҡтың йәиһә крәҫтиән фермер хужалығының төп эшмәкәрлеге булған баҡсасылыҡ, йәшелсә үҫтереү, ҡошсолоҡ, умартасылыҡ һ.б. өлкәләрҙә ауыл хужалығы продукцияһын етештереү технологиялары РФ субъекты билдәләгән минималь майҙандан кәмерәк булған ер участкаһында эш итә алыуҙы тәьмин итһә, ер пайы (пайҙары) хужаһы ошо ер участкаһын аныҡ билдәләп, бүлеп алыу хоҡуғына эйә. Мәҫәлән, ер пайы өлөшөн үҙенең шәхси ярҙамсы хужалығынды булдырыу йәиһә булғанына өҫтәү, умарталыҡ тотоу өсөн бүлеп алып була, сөнки бының өсөн 3-4 гектар ер ҙә етә. Пайҙарға бүленгән һөрөнтө ерҙәр бер ауыл биләмәһенә ҡараған барлыҡ ауыл пайсыларының уртаҡ милеге булып торғас, аныҡ урыны билдәләнгән ер участкалары пайсыларҙың дөйөм йыйылышының ҡарары менән бүлеп бирелә. Хатта йыйылыш ошоға ризалыҡ бирмәгән хәлдә лә, закон пайсыға айырым ер участкаһын бүлеп алыуҙың башҡа юлдарын (судҡа мөрәжәғәт итеүгә тиклем) рөхсәт итә.

Ер мәсьәләләрен хәл итеүҙә урындарҙағы хакимиәт етәкселәренең роле тураһында ла һүҙ булды түнәрәк ҡорҙа. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡайһы бер төбәктәрҙә етәкселәр үҙҙәренә тапшырылған дәүләт әһәмиәтендәге бурысты тиҙ арала һәм сифатлы итеп башҡарып сығыу хаҡында артыҡ баш ватып маташмай килде. Киреһенсә, үҙебеҙҙең ерҙәрҙе башҡа төбәктәрҙән килеүселәр ҡарамағына тапшырыуға "ең һыҙғанып" тотоноусы башлыҡтар ҙа табылып тора. Бөгөн хосусилаштырылған ерҙәргә тиҙ арала теркәү процедураларын уҙғарыуҙы тамамлап, уларҙы файҙаланыуҙың мөмкин булған барлыҡ формаларын ҡуллана алыу фарыҙ. Ер - тәбиғәттән бирелгән дөйөм халыҡ байлығы, һәм уның бушь, түлһеҙ ятыуынан айырым кешегә лә, илгә лә файҙа булмаясаҡ.

Ергә милек хоҡуғы теркәлгән һәм теләге булған һәр кемдең үҙенә тейешле ерҙә ауыл хужалығы продукцияһы етештерә алыу хоҡуғын ғәмәлгә ашыра алыуына урындарҙағы етәкселәр булышлыҡ итергә тейеш. Байтаҡ ҡына ер майҙандарының күп йылдар буйы эшкәртелмәй ятып, сүп үләндәре, ҡыуаҡ-һаяуаҡ һәм ағас менән баҫылып барыуына үҙебеҙ шаһитбыҙ. Бигерәк тә оло юлдарҙан ситтә ятҡан төпкөл ауылдарҙа хәҙер ер эшкәртерлек йәштәге кешеләрҙең аҙайғандан-аҙая барыуы ла бик хәүефле күренеш. Бар ғүмерен ауыл хужалығы иҡтисадын үҫтереүгә бағышлаған ғалим Зифҡәт ағай Сәйетғәлиевтың: "Башҡорт үҙ еренең хужаһы булыуҙан туҡтаһа, уның милләт булараҡ һаҡланып ҡалыуына оло хәүеф тыуасаҡ, шуға күрә был милләтебеҙҙең иң төп мәсьәләһе итеп ҡаралырға тейеш", тигән һүҙҙәре замандаштарыбыҙҙы һиҫкәндереп, ауыл хеҙмәтсәндәренең дә, урындарҙағы етәкселәребеҙҙең дә халҡыбыҙ киләсәге алдындағы яуаплылығын көсәйтһә ине, тип теләйек.

Бынан 100 йыл самаһы элек йәш, әммә оло йөрәкле һәм зирәк аҡыллы шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич тыуған ерен, уның көҙрәтле тупрағын данлап, "Тупраҡ башҡорт бәхетелер, бәхетебеҙҙең тәхетелер" - тигән һүҙҙәре менән үҙ халҡына мөрәжәғәт иткән. Уның: "Тупраҡ китһә, һау бул, донъя, өҙөлмәктер самабыҙ", - тиеүе лә бөгөнгө ватандаштарыбыҙға хәүефле киҫәтеү булып яңғыраған кеүек. Ер-тәхетебеҙҙе сит-яттар ҡулына үҙ теләгебеҙ менән бирмәнәк, үҙ бәхетебеҙҙән үҙебеҙ ваз кисмәнәк ине, туғандар.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

**Закирйән ҒАТАУЛЛИН, Мәсетле районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:**

Әлеге көнгә 156 мең гектар тәшкил иткән район ерҙәренең 73 мең гектары ойошмалар, йәиһә айырым шәхестәрҙең милегенә ҡарай. Ерҙәрҙең бер өлөшө 9460 шәхси ярҙамсы хужалыҡ ҡарамағына һәм электән ергә хоҡуғы булған ойошмаларға бирелде. Ер пайы алыу хоҡуғы бирелгән 4965 кешегә 52283 гектар майҙандағы ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе өлөшләтә дөйөм милек сифатында бүлеп биреү ҡаралғайны. Ошо ваҡытҡа тиклем 4118 кеше (83%) ер участкаһына хоҡуғы теркәлгән таныҡлыҡ алды, 253 кеше (6%) оншдай хоҡуҡтан баш тартты. 17 ауыл хужалығы ойошмаһының 6-да был эш тамамланды.

Әммә ерҙәрҙе хосусилаштырыу ошоноң менән тамамланды, тип әйтергә иртәрәк әле. Был өлкәлә хәл ителмәгән проблемалар бар. Үҙҙәренә тәғәйен ер участкаһын аныҡ билдәләгән урындан бүлеп, айырып алырға ниәт итеүселәр бар. Башҡа пайсыларҙың рөхсәтен алғандан һуң ул участкаының сиктәре билдәләнеп, межалау процедураһы уҙғарылғандан һуң ул кадастр иҫәбенә ҡуйылырға тейеш. Кадастр паспортын алғас, бүлеп алынған ергә хоҡукты теркәү мөмкин була. Бер йәки бер нисә кешенең пайынан барлыҡҡа килгән ер участкаһын межалау эштәренең хаҡы, ошо ерҙәрҙе үлсәүҙең ҡатмарлығына ҡарап, 3-5 мең һумдан бер нисә тиҫтә мең һумға тиклем етеүе мөмкин. Ә был үҙе уҡ аныҡ ер участкаһын бүлеп алырға теләүсе өсөн кәртә булып тора.

Ғәмәлдә хосусилаштырылған ер хужаларының күбеһе бөгөн үҙ ерҙәрен файҙалана алмай, һәм ул ерҙәр эшкәртелмәй ята. Йыш ҡына ошо ерҙәрҙе арендаға алырға теләүселәр ҙә булмай. Законға ярашлы, межалау уҙғармайынса, был ерҙәрҙе өлөшләтә булһа ла арендаға биреп булмай.

Бөгөн прокуратураның элекке "Мечетлинское" тәжрибә-етештереү хужалығына ҡараған 1865 гектар ерҙең ошонда эшләгән 148 кешегә милеккә бирелеүен законһыҙ, тип ҡарауы менән килешмәйбеҙ. Ваҡытында Дәүләт акты менән ошо ерҙәр хужалыҡҡа даими срокһыҙ файҙаланыу хоҡуғы менән бирелһә лә, хужалыҡ етәкселеге уны законда ҡаралған тәртиптә, йәғни 2006 йылдың 1 ғинуарына тиклем үҙ милке итеп теркәү уҙғармаған. Ошо ваҡытҡа тиклем дәүләт теркәүе нигеҙендә сиктәре билдәләнмәгән дәүләт милкендәге ерҙәрҙе хосусилаштырыуҙы закон тыймай. Беҙ үҙебеҙҙең граждандарыбыҙҙың хоҡуғын яҡлай алырбыҙ, тип өмөтләнәбеҙ.

Ерҙе хосусилаштырыуҙың төп маҡсаты - уның менән файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелегенә өлгәшеү. Әлегә беҙ ошо маҡсаттан йыраҡбыҙ. Ергә милек хоҡуғы бирелде, ер хужаларына бер юлы ике йылға иҫәпләнгән һалым да килде. Ә ерҙән әлегә улар бер һумлыҡ та файҙа алып өлгөрмәне бит. Бындай хәл үҙе үк көсөргәнешлек тыуҙыра. Тимәк, хосусилаштырылған ерҙәрҙе файҙаланыуға әтәргес булған саралар ҡулланыу тураһында уйлашырға кәрәк. Минеңсә, эшкәртелгән ер майҙаны 100 гектарҙан 300-гә тиклем етһә, йәиһә ошо ерҙәрҙе бергәләп файҙаланыусылар 5 пайсынан да кәм булмайынса, улар етештергән ауыл хужалығы продукцияһының 40 проценты дәүләт һатып алыу акттары буйынса дәүләткә тапшырылһа, йәки дәүләт ҡуйған башҡа бер шарттар үтәлгән осраҡта, ер менән файҙаланыусыларға субсидиялар һәм дотациялар иң түге нәүбәттә бирелеүе мотлаҡ. Ғөмүмән, хосусилаштырылған ерҙәр әйләнешен мөмкин булғанса әүҙемләштереү, ауылда ер эшкәртеүсе урта эшҡыуарҙар класын булдырыу, ерҙәребеҙҙең арзан хаҡҡа һатылып бөтөп, ауылдарҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең ергә хужа булыу хоҡуғынан мәхрүм ҡалыуына юл ҡуймау, ауыл хужалығының һөҙөмтәлелеген тәьмин итеү өсөн беҙгә бик күп көс һалырға кәрәк буласаҡ.

## АТА-БАБА АҠЫЛЫ

**Мөхәмәтсәлим ӨМӨТБАЕВ**



# ЙӘМҒИӘТ ТӘРТИПТӘРЕ

**8.** Баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеүҙе, башҡорттар ғәскәри булған заманда уҡ индерелгәнсә, мотлаҡ мәжбүри итергә кәрәк. Сәбәбенһеҙ баҡса үҫтермәүселәрҙе һәм иген икмәүселәрҙе яза рәүешендә юл йүнәтеү, күпер төҙөү, ер межалаусы бағаналар әҙерләп ултыртыу һәм шуның ише башҡа йәмғиәткә файҙалы эштәргә ҡушырға. Быны баҡсасылыҡҡа тотошлай күскәнгәсә ҡулланырға. Ниәтләнгән эшсаралар хаҡында алдан губерна "Ведомостар"ында баҫтырып сығарғанда, волость һәм ауыл сходтарында иғлан иткәндә, файҙалы булыр ине. Юғиһә, ғәскәри идаралыҡтар бөтөрөлөр алдынан хәрби түрәләр башҡорттарҙы иген игеү, баҡса үҫтереү менән шөғөлләнмәүҙә ғәйепләп, кинәттән тән язаһына тарттыра башланылар. Башҡорт ғәскәре бөтөрөлгәндән һуң инде, ярлы башҡорттарҙың күбеһе, көслө надзор юҡлыҡтан, шулай уҡ тейешле һөнәре булмау сәбәпле, бай ер биләүселәр ҡулына барып ҡаптылар, һәм алып торған аҡсаларын ҡайтарыу маҡсатында һәр ваҡыт шуларға эшләргә, шулар ҡулы аҫтында йәшәргә мәжбүрҙәр. Йәмғиәттәге ғәфү ителгеһеҙ тәртиптәр, урындағы һәм юғарылағы власть башлыҡтарының үҙ хоҡуҡтарын артыҡ файҙаланыуҙары, яуапһыҙ эш-ҡылыҡтары арҡаһында шундай хәлгә ҡалдылар улар.

**9.** Крепостной ҡоллоҡтан азат иткәнсе (1861) алпауыт ҡулында булған крәҫтиәндәр кеүек уҡ, башҡорттар ҙа гражданлыҡ ведомствоһына күскәнгә (1863) саҡлы аҡсалата пособие һорай белмәйҙәр ине. 1867 йылғы аслыҡ сығыу арҡаһында улар башҡа крәҫтиәндәр менән бергә беренсе тапҡыр орлоҡ һатып алыу өсөн аҡсалата пособие алдылар, ә аҫлыҡ аяланғастарға ул үҙ ғаиләләрен туйҙырыу өсөн бирелгәйне. Ләкин алынған сумма әле булһа түләнеп бөтмәгән: бирәсәктәрҙе ҡайтарыу ваҡытын кисектереү хаҡында әленән-әле килешеүҙәр төҙөлә, улай ғына ла түгел, ссудалар һорап, яңы ғаризалар яҙыла. Крәҫтиәндәр һәр саҡ ҡаҙна аҡсаһына өмөт итмәһендәр өсөн бөтә урында ла йәмғиәт һөрөнтө ерҙәре булдырырға кәрәк. Улар ҡытлыҡ йылдарҙа крәҫтиәндәрҙе иген менән дә, аҡса менән дә күтәрер ине. Был ерҙәрҙә игендән башҡа емеш-йәшелсә үҫтерергә кәрәк һәм эшкә яраҡлы һәр кеше унда бер нисә көн эшләргә тейеш. Йәмғиәт һөрөнтө ерҙәренән алынған дөйөм килем ҡороолоҡло йылдарҙа йән башынан бүлеп бирелер ине.

(Аҙағы. Башы 13-16-сы һандарҙа).

*✓ Ниңәлер беҙҙең булғаны менән ҡәнәғәтләнә белеү тойғоһо юҡ кимәлендә. Алама мәғәнәһендәге нәфсебеҙ күршенекен күреп, беҙгә лә уға тиңләшергә саҡыра.*



# БАШҠОРТ әгәр ҙә ул диненә,

**Быйыл йәй үтәсәк III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, көҙ уҙғарыласаҡ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһы алдынан башланған "Түңәрәк ҡор" артындағы һөйләшеүҙәрҙе дауам итәбеҙ. Был юлы "Заман һәм башҡорт халҡы" темаһына арналған әңгәмәлә филология фәндәре докторы, БР Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес ХИСАМЕТДИНОВА, социология фәндәре кандидаты, БР Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының фән буйынса директор урынбаҫары Илгиз СОЛТАНМОРАТОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты белгесе Фәнзил ӘХМӘТШИН ҡатнаша. Әңгәмәне яҙыусы һәм журналист Әхмәр ҮТӘБАЙ алып бара.**

**Ә. Үтәбай: Хәҙерге ваҡытта башҡорт милләте проблемалары менән шөғөлләнеүсе дәүләт органдары, төрлө ведомстволар, учреждениелар, министрлыҡтар, ижтимағи ойошмалар эшендә күҙәтелгән йәнләнеү милләтебеҙ киләсәгенә ҡарата өмөт уята. Әммә донъяла барған интеграция хәрәкәттәре, глобалләшеү күренештәре, Рәсәй Федерацияһы етәкселегенең федерация составындағы республикалар, уларҙағы милләттәр яҙмышына бармаҡ аша ҡарауы барыбыҙҙы ла һиҫкәнергә мәжбүр итә. Үкенескә ҡаршы, беҙ иртәгәге көндөң таңы нисек атырын белмәгән илдә йәшәйбеҙ һәм киләсәктә милләтебеҙҙе һаҡлай һәм яҡлай алырлыҡ дәүләт механизмы һаҡланып ҡалыуына ла гарантия бирә алмайбыҙ. Ошондай шарттарҙа милләттең үҙен-үҙе һаҡлай һәм яҡлай алырлыҡ потенциалы барлығы иҫкә төшә. Һеҙ ундай көстө ниҙә күрәһегеҙ? Ниндәй генә ҡоролтайҙар үтмәһен, унда ниндәй генә программалар ҡабул ителмәһен, милләттең үҙенең йәшәү көсө булмаһа, был саралар диңгеҙҙәге тамсы ише генә бит.**

**Донъяның һөмһөҙ заттары элек беҙ ҡан түгеп һаҡлап ҡалған тыуған еребеҙҙе, булмышыбыҙҙы яйлап-яйлап яулай, һорап та тормайҙар хәҙер, федерация милке, дәүләт фонды тип иҫәпләнгән урман-тауҙарыбыҙҙы аукцион аша һатып та алалар. Ҡасандыр ата-бабаларыбыҙ ҡан түгеп һаҡлап ҡалған, милләтебеҙҙе һаҡлаған урман-тауҙарыбыҙ хәҙер килеп үҙебеҙҙең башҡа етмәҫ, тимә. Миҫал өсөн, тигеҙ яландарҙа, далаларҙа йәшәгән республикалар алдында бындай проблемалар бөтөнләй тормай. Еребеҙҙе ҡоралһыҙ-ниһеҙ яулайҙар, беҙ хатта ризаһыҙлығыбыҙҙы белдереп тә өндәшмәйбеҙ. Әлегә минималь йәшәү шарттарыбыҙҙы тәьмин итерлек "штат расписание"һына индерелгәнбеҙ ҙә, шул урынды юғалтмаҫ өсөн, өндәшмәйбеҙ. Шулай түгелме?**

**Ф. Әхмәтшин:** Ҡоролтай эшендә ҡатнашҡанда милләтебеҙ яҙмышы хаҡында борсолған интеллигенция вәкилдәренең, йәштәрҙең, эшҡыуарҙарҙың булыуы һөйөндөрһә, унан сығып, халыҡ араһына барып инһәң, тегендәге мөхит юғала. Минеңсә, һуңғы ваҡытта матди донъя артынан ҡыуыу үҙебеҙ менән рухыбыҙ араһына кәртә ҡуйғандай булды. Мин күп кенә бәләләребеҙҙе шунда күрәм. Матди яҡтан ҡарағанда хәҙерге башҡорт халҡының торошо, көнкүреше ул хәтлем ҡурҡыныс түгел. Шөкөр итерлек. Ауылдарға барһаң, һәр бер өйҙә төҫлө телевизор бар, һәр йорт янында еңел машина ултыра. Әгәр ҙә 80-се йылдарҙа йәшәгән кешеләрҙе бөгөнгө башҡорт өйөнә индерһәң, улар: "Былар ҡайһылай бай йәшәй ул. Былар берәр матди сығанаҡ йә ат башындай алтын таптымы икән?", - тип әйтер ине. Тик ниңәлер беҙҙең булғаны менән ҡәнәғәтләнә белеү тойғоһо юҡ кимәлендә. Алама мәғәнәһендәге нәфсебеҙ күршенекен күреп, беҙгә лә уға тиңләшергә саҡыра. Бәлки, беҙҙең төп проблемабыҙ ошондалыр, тием.

Тарихыбыҙ ни тиклем бай, сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ ни тиклем сағыу, юғары зауыҡлы булмаһын, беҙ һан буйынса артмаһаҡ, Уралтауыбыҙҙы үҙебеҙҙең халыҡ менән тултырмаһаҡ, уны башҡалар яулаясаҡ. Изге урын буш булмай, тиҙәр был осраҡта. Ә үҙебеҙ иһә экзотик хәлдә генә тороп ҡалыуыбыҙ бар. Һәр бер ғаиләлә атай менән әсәй хужа. Атай менән әсәй үҙҙәрен нимәнәндер мәхрүм итеү иҫәбенә балаларын яҡшыраҡ кейендерергә, ашатырға, яҡшыраҡ йәшәү шарттары тыуҙырырға тырыша. Башҡорт та ошо ерҙең хужаһы, йәғни атаһы менән әсәһе, әммә беҙ ситтән килгәндәргә үҙебеҙҙең хужа булыуҙы белдерә алабыҙмы, улар беҙҙе хужа итеп таныймы? Юҡ. Бына был хәл беҙҙең өсөн яҙылмаған ҡанун кимәлендә нығынырға тейеш. Беҙ үҙебеҙҙең бында хужа икәнлегебеҙҙе беләбеҙ, тоябыҙ, әммә ҡунаҡтарыбыҙҙың үҙҙәренең ҡунаҡ икәнен онота башлауы ла беҙҙе уйға һалырға тейеш.

**И. Солтанморатов:** Мин Ш Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының төп маҡсатын милләттең үҙойошоусанлыҡ көсөн уятыуында күрәм. Донъяла глобаль үҙгәрештәр башланған саҡта беҙ милләтебеҙҙә үҙен-үҙе ойоштороу сифатын булдырып өлгөрһәк, киләсәктә милләтебеҙ йәшәренә өмөт ҙур. Мәскәүҙә Кремль янында бик ҙур социологик тикшеренеү үҙәктәре бар. Уларҙың төбәктәрҙә лә базалары урынлашҡан, ҡыҫҡаһы, был үҙәктәр ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бар Рәсәйҙе өйрәнергә һәләтле. Ул үҙәктәр фекеренсә, Рәсәй халҡының ҙур өлөшө, йәғни 70 проценты илебеҙҙәге демократик принциптарға ышанмай, киреһенсә, илдә ҡаты тәртип урынлашыуын теләй икән. Күрәһегеҙме, беҙгә ниндәй фекер һеңдерәләр, йәғни илебеҙгә демократия кәрәкмәй булып сыға.

Былтыр беҙ Бойондороҡһоҙ башҡорт форумы ағзалары Темәстәге шундай уҡ ойошма ағзалары менән бергәләп Әтек ауылында Алдар батырҙың иҫтәлегенә бағышлап ҙур сара үткәрҙек. Был сараға беҙ дәүләттең бер тинен дә файҙаланманыҡ, бары тик урындағы ауыл хакимиәте был сараны үткәрергә рөхсәт кенә бирҙе. Беҙҙең Башҡортостан телевидениеһы журналисы килеп, был сара хаҡында тапшырыу ҙа эшләне. Сара шул тиклем матур, ихлас үткәйне, унда ҡатнашыусыларҙың 70 проценты бала-саға, үҫмерҙәр ине. Беҙгә киләсәктә башҡорт йәмғәтселеге үҙе ойоштороған сараларға күберәк иғтибар бирергә кәрәк. Әбйәлил районының Буранғол, Һәйетҡол ауылдарында, мәҫәлән, халыҡ үҙе күтәрелеп сығып, эскелеккә ҡаршы көрәшә.

Демографик хәлгә килгәндә, совет осоронда дөйөм илебеҙҙең халыҡ һаны артыуын Урта Азия, Ҡаҙағстан, Кавказ республикалары тәьмин итеп килде лә, СССР тарҡалғайны, Рәсәйҙә халыҡ һаны йылдам рәүештә кәмей башланы. Ҡарағыҙ әле, совет осоронда балалар һаны артыуы өсөн барлыҡ стимулдар ҙа булды бит. Бигерәк тә ҡала ерендә өс балаһы булған ғаиләләргә сиратһыҙ фатир бирелде. Беҙгә шул мәлдәге уңайлыҡты файҙаланып ҡалырға кәрәк булған да бит. Юҡ, ул саҡта киҫкен рәүештә - 1, уҙа барһа, 2 балала туҡталып ҡалдылар. Ул инерция әле һаман да дауам итә. Фәнзил менән килешәм, беҙгә артырға кәрәк, улай ғына түгел, артыуҙағы тотороҡлоҡто һаҡларға, сифат йәһәтенән дә артырға кәрәк.

**Ф. Әхмәтшин:** Бер егет миңә: "Беҙҙең ауылда ике ҡатлы мәктәп һалдылар, әммә унда уҡыусы балалар һаны етмәй. Ниңә шундай мәктәп төҙәргә инде беҙҙең ауылда?" - тип мәктәп төҙөүселәрҙе тәнҡитләгәйне. Мин уға йәнем көйөп: "Ҡустым, мәктәбегеҙҙе төҙәтөүсе Президентыбыҙ саҡ ҡына өлкәнерәк шул, үҙе барып балаларығыҙҙың һанын арттырып бирер ине...", - тинем. Беҙ, ғөмүмән, бар йәһәттән дә кемгәлер: дәүләткә, президентҡа, етәксегә һалынып өйрәнгәнбеҙ.

**И. Солтанморатов:** Был йәһәттән беҙ урыҫтар менән дә оҡшашбыҙ. Беҙгә, татарҙарҙан айырмалы рәүештә, дәүләт һәм һаҡларға ил кәрәк. Татарҙар иһә, диаспора менән йәшәгән саҡта ла, үҙ-үҙҙәрен һаҡлай ала.

**Ф. Әхмәтшин:** Быларҙың нигеҙендә ышаныу объектына ихтыяж да яталыр. Совет ҡоролошо урыҫтарҙың да, беҙҙең дә күңелдән Аллаһы Тәғәләгә ышанысты алып ташларға маташты һәм күпкә иреште лә. Шул уҡ Илгиз әйткән Темәс ауылы, ғөмүмән, Баймаҡ районы ауылдары мосолмандары йыл һайын үҙҙәре өсөн һабантуй ойоштороп килә. Урындағы властар быға юл ҡуймаҫ өсөн төрлөсә тыйып маташа, йыйындары барыбер үтеп тора. Һәм иң мөһиме нимә: унда килеүселәрҙең барыһының да ғаиләһендә 3-әр, 4-әр, 5-әр, 6-шар бала. Был нимә тураһында һөйләй: әгәр ҙә халыҡ үҙе ойошоп, үҙенсә йәшәһә, динле булһа, демография мәсьәләһе үҙенән-үҙе хәл ителә.

Яңыраҡ үҙемсә бер демографик модуль төҙөп ҡараным. Бының өсөн 12 мең ғаилә алдым. Әгәр ҙә һәр ғаиләлә тыуыр балаларҙың һаны мотлаҡ 5-әү булһа, 115 йылдан 12 мең ғаиләнән тыуа башлаған халыҡтың дөйөм һаны 168 миллионға барып етә, тигән һүҙ. Тимәк, милләттең һанын арттырыу бер нәмә лә тормай. Быға ирешер өсөн мейеләге йәки йөрәктәге бер кәртәне ватырға кәрәк.

I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ниндәйҙер позицияларҙы ҡайтарыу булһа, II ҡоролтай ҡаршылыҡты еңеү булды. Ә инде III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын мин алға китеү тип билдәләр инем. Беҙ халҡыбыҙға 100 йыллыҡ программа төҙөп, шул юлды күрһәтергә бурыслыбыҙ. Һәр кем алдына аныҡ маҡсат ҡуйылһа, ул уны мотлаҡ рәүештә үтәйәсәк. Ә бурыс бирәү генә: үҙ ғаиләңдә 5 бала тыуҙырыу һәм уларҙы үҙ рухында тәрбиәләү, артабан да балаларыңдың, ейәндәреңдең, бүләрҙәреңдең ғаиләләрендә лә шул уҡ демографик модулдең үтәлешен тәьмин итерлек нигеҙ һалыу.

**Ф. Хисаметдинова:** Егеттәрҙең әйткән фекерҙәренә ҡыуанып ултырам. Уй-хыялдарыбыҙ тура килә. Ысынлап та, һан мөһим нәмә, шул уҡ ваҡытта сифат та мөһим. Бының өсөн милләттең һәр ағзаһының башына һәм йөрәгенә һан һәм сифат идеяларын һалыу өсөн психолог кәрәк. Мин ундай психолог хеҙмәтен педагогия, психология факультеттары эшмәкәрлеге формаһында түгел, йәштәрҙе йыйып, уларға барыһын да аңлатып, күрһәтмәләр биреү йүнәлешендә күрәм. Әммә дөйөм йыйылыштарҙа, конференцияларҙағы сығыштар ғына был мәсьәләне хәл итмәйәсәк. Шуға күрә иң тәүҙә йәштәр араһынан рухи лидерҙарҙы билдәләү фарыҙдыр. Уларҙы бер урынға йыйып, аҙна-ун көнлөк курстар үткәреп, улар үҙ төркөмдәрендә шундай уҡ ғәмәлде башҡарһа, күпкә алға китеү мөмкин буласаҡ.

Рухи бөлгөнлөккә төшөүселәргә лә психолог ярҙамы кәрәк. Ундайҙар үҙ ауылында ер алып, өй һала ла, ҡаланыҡыларға һата. Дөрөҫөн әйткәндә, йорто менән бергә тыуған ерен һатҡанын да ул аңламай. Әле мин Шамониноләғы "Үҙ йортом" программаһына шул тиклем ҡыуанып йөрөгәйнем. Әле килеп, күптәрҙең төҙөлөп бөтөр-бөтмәҫтән йорттарын һатыуы хаҡында ишетеп, тағы ла көйөндөм. Улар, асылда, үҙебеҙҙең милләт вәкиленә түгел, мулыраҡ аҡса алыр өсөн ситтәргә һата. Үкенескә ҡаршы, яҡшы ниәт менән башланған ошо эшкә ҡаршы эшләүселәр ҙә бар.

Мин, әсәй кеше булараҡ, бер нәмәгә иғтибар итәм. Беҙҙә ауылдан сыҡҡан һәм ҡала башҡорттары бар. Ҡасандыр ауылдан килеп, хәҙер 70-80 йәшен тултырыусыларҙың балалары һәм ейәндәренең күбеһе беҙҙең милләт вәкилдәре түгел. Уларҙан һуң Өфөгә килеүселәрҙең балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәре генә милләтебеҙҙең рухын үҙ итте. Шул уҡ ваҡытта хәҙер ҡалала үҫеүсе башҡорт йәштәре менән ауылдыҡылар араһында һиҙелерлек кәртә, айырымлыҡ барлыҡҡа килде. Улар һаман да уртаҡ тел таба алмай. Ауылдыҡылар ҡала башҡорт йәштәренең ҡыйыу сығыштарын, мәҫәлән, экстремизм күренеше тип баһалай. Өфөгә килеүсе йәштәр менән ҡаланыҡылар уртаҡ тел таба алһа ла, халҡыбыҙҙың 50 проценты ауылда йәшәй. Беҙ ҡала йәштәре менән ауыл

> **Фәнзил ӘХМӘТШИН**
>
> ***Яңыраҡ үҙемсә бер демографик модуль төҙөп ҡараным. Бының өсөн 12 мең ғаилә алдым. Әгәр ҙә һәр ғаиләлә тыуыр балаларҙың һаны мотлаҡ 5-әү булһа, 115 йылдан 12 мең ғаиләнән тыуа башлаған халыҡтың дөйөм һаны 168 миллионға барып етә, тигән һүҙ. Тимәк, милләттең һанын арттырыу бер нәмә лә тормай. Быға ирешер өсөн мейеләге йәки йөрәктәге бер кәртәне ватырға кәрәк.***

***✓ Рәсәй Федерацияһы етәкселегә башҡорттар дингә килмәһен өсөн шул тиклем күп көс түгә. Улар беҙҙең йөрәктең уяныу аҫҡысы диндә икәнлеген бик яҡшы белә.***

# ЙӨРӘГЕ УЯНЫР...

## ғаиләһенә, зат-араһына ҡайтһа



йәштәрен бер уйлы, бер рухлы итә алһаҡ ҡына, киләсәгебеҙ буласаҡ.

Тағы ла бер нәмә. Беҙҙең институт шәжәрә төҙөү менән шөғөлләнә. Күп кенә кешеләр үҙҙәренең шәжәрәһен ҡулға алғас, күҙенә йәш алып ҡайтып китә. Әммә шәжәрәне айырым ғаиләләр эшләтә. Тәжрибә өсөн үҙемдең тыуған ауылымдың шәжәрәһен эшләп ҡараныҡ. Минең ауылым өсөн был проблема булманы, сөнки шәжәрәнең фәнни яғын бушлай эшләүсе мин бар. Полиграф хеҙмәте өсөн аҡса йыйырға тура килде. Пенсионерҙарҙан, күп балалы ғаиләләрҙән, ғәрип-ғөрәбәләрҙән аҡса алмаҫҡа, тип һөйләштек. Аҡсаны тиҙ арала йыйып килтерҙеләр. Уны йыйыусылар ауыл халҡының был эштә ғәҙәти булмағанса әүҙемлек күрһәтеүе хаҡында һөйләне. "Күсәк, күсәк (беҙҙең яҡта аптырауҙы, ғәжәпләнеүҙе белдереүсе һүҙ), был аҡса Фирҙәүескә түгел бит. Минең олата-бабам рухына хәйер..." - тип, беҙ бөтөнләй исемлеккә индермәгән әбей-бабайҙар ҙа үҙҙәре аҡсаларын бирҙе. Ауылды берләштереүҙең ошондай шәжәрә төҙөү формаһын республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайышындағы ауылдарында ла файҙаланып була бит. Әйтәйек, Дүртөйлә районының Иҫке Байыш ауылынан берәү килеп, шәжәрәһен эшләтеп, үҙенең башҡорт булыуын таныны икән, тотош ауылға шәжәрә төҙөү нимәгә алып килерен күҙаллауы ҡыйын түгел. Дөйөмләштереп әйткәндә, халыҡ менән әле беҙ тейешле кимәлдә эшләмәйбеҙ. Бының өсөн милләтте реабилитациялау төркөмө төҙөп, планлы рәүештә эшләргә генә кәрәк.

**Ә. Үтәбай: Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙының үҙ ауылындағы тәжрибәһе күпкә ишара, егеттәр. Халҡыбыҙҙың рухы иҫән, уның үҙен-үҙе ойоштороу мөмкинлеге лә бар. Миҫал өсөн чечендарҙы алайыҡ. Уларҙа беренсе урынға милләт түгел, тейп йәки тайфа, беҙҙеңсә әйткәндә, ара, зат ҡуйыла. Беҙҙе иһә башҡорт һүҙе генә ойоштора, арабыҙ, затыбыҙ алыҫлаштыра. Был нимә тураһында һөйләй: милләтебеҙ эске яҡтан тарҡау хәлдә. Әйтергә кәрәк, милләтебеҙҙе цемент кеүек бәйләр ептәр бушаған. Нимә генә тимә, кешеләрҙе бер-береһенә ныҡ итеп бәйләүсе көс - туғанлыҡ ебе. Көслө ғаиләләр булһа, көслө аралар, заттар булһа, милләт көслө була, тигән концепцияға һалып була был идеяны. Әйтәйек, мин бына Бөрйән ырыуына ҡараған Ҡуяндар араһы вәкилемен. Беҙҙең арағa меңдән ашыу кеше ҡарай. Беҙ барыбыҙ ҙа арабыҙҙың башында тороусы аҡһаҡалға буйһонабыҙ, ул үҙ нәүбәтендә милләттең аҡһаҡалдар ҡоро ағзаһы.**

**Ф. Әхмәтшин:** 90-сы йылдарҙың башында ырыуҙар хәрәкәте башланғас, бер төркөм ғалимдар быға ҡаршы сығып, ырыуҙар хәрәкәтен трайболизм күренеше тип баһаланы. Әле килеп, шәжәрә хәрәкәте башланғас, ырыуҙар мәсьәләһе үҙенән-үҙе күтәрелде. Милләт барыбер яһалма күренеш һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, ҡыпсаҡтарҙы алып ҡараһаҡ, улар беҙҙә лә, ҡаҙаҡтарҙа ла, үзбәктәрҙә лә, ҡырғыҙҙарҙа ла, башҡа бик күптәрҙә лә бар. Беҙ милләт булып формалашып, нигеҙебеҙҙе алып ташланыҡ та, ҡоро стена эсендә ултырып ҡалған кеүекбеҙ. Стена, әлбиттә, матур, әммә уның нигеҙе юҡ, шуға күрә ул һелкенә. Милләтебеҙҙең төньяҡ-көнбайыш стенаһы емерелә башлауы ла нигеҙ бушаҡлығынан килә.

Бөгөн һабантуйҙарға барғы ла килмәй. Сөнки ул административ яҡтан шундай итеп ойошторола, унда халыҡтың үҙаллылығына бөтөнләй урын ҡалдырылмай. Унда бараһың, тамаша ҡылаһың, әммә күңелдең бер ҡылы ла ҡуҙғалмай. Бөтәһендә лә бер үк төрлө күңелһеҙ доклад, маҡтау грамоталары тапшырыуҙар, ҡайын тураһындағы йырҙар, әрмәндәр шашлык бешерә, вьетнамдар үҙҙәренең бер генә тапҡыр кейә торған кейем-һалымын һата, һ.б.

**Ф. Хисаметдинова:** Шәжәрә байрамдары үткәреү тураһында Хөкүмәт ҡарары ҡабул ителеп, күп тә үтмәҫтән, дүртөйләләр мине үҙҙәренең шәжәрә төҙөү буйынса семинарына саҡырҙы. Мин уларға һәр бер ырыуҙың атрибуттары, тамғалары, орандары, ҡоштары хаҡында һөйләй башлағайным, берәү торҙо ла: "Мына хәзер безне ни өчен "ҡарға" тип атаганнарын аңлаҙым инде, без алай булгач башкорт булып чыгабыз инде", - тип әйтеп һалды. Бына бит нисек: сараны тәбиғи, халыҡсан итеп ойоштороһаң, хатта күптәргә милли асылы ла аңлашыла. Беҙгә хәҙер ара, зат исемдәре хаҡында һүҙ алып барып, ырыуҙарҙың атрибуттарын тәҡдим итергә кәрәк. Беҙгә Татарстандың Лениногорск районынан бер ағай шәжәрәһен эшләтергә килде. Эшләнек, ул Һарылы-мең ырыуы башҡорто булып сыҡты. "Шунан, Фирдәүес Гилмитдиновна, без башкорт булып чыктыкмы?" - тип ул шым ғына итеп минән һораны. Мин уға: "Бына һеҙгә документ, башҡортһоғоҙ инде", - тием. Ул бары тик ҡайтып, балалары менән кәңәшләшеп килгәндән һуң ғына шәжәрәнең башына "Һарылы-мең ырыуы башҡорто" тигән һүҙҙе яҙырға рөхсәт бирҙе. Ул үҙҙәренең ауылында йәшәүсе икенсе бер Алтынбаев фамилиялы башҡорт нәҫеле хаҡында ла һөйләне. Улар: "Беҙ Алтынбаев булғас, башҡорт, беҙ бай", - тип йөрөйҙәр ти. Уйлап ҡараһаң, бәләкәй генә ошо деталдәр артында ла халҡыбыҙҙың тотош тарихы ята.

**Ә. Үтәбай: Европаның һәм Американың "африкандар феномены" хаҡында яҙғаным да булды. Мәсьәләнең асылы шунда: хәҙерге ваҡытта был ҡитғаларҙың интеллектуаль һәм физик потенциалының төп өлөшөн ҡара тәнле африкандар тәшкил итә. Уларҙың спортсылары, табибтары, яҙыусылары, ғалимдары, полиция хеҙмәткәрҙәре, асылда, ҡара тәнлеләр. Тарихтан белеүебеҙсә, үткән быуаттарҙа Европа һәм Америка колонизаторҙары Африкаға баҫып инеп, унда ҡәбилә-ырыу менән йәшәгән ерле халыҡты ҡол итеп, Европаға һәм Америкаға ҡыуған. Улар иң ауыр физик эштәргә йәлеп ителде. Бөгөн килеп, беҙ нимәгә шаһитбыҙ: Европа һәм Америка колонизаторҙары африкандарҙы ҡол итеп эшләтеп, уларҙа тәбиғәт тарафынан һалынған көстө уятҡан, хәрәкәткә килтергән генә икән. Ни өсөн тигәндә, йылдар буйына тәпке йә кәйлә тотоп эшләүсе африканлы ауыр физик хеҙмәтенең был мәлен үҙ аллаларына зекер әйтеүгә бағышлаған. Ошо рәүешле африкандар тәбиғи йоҡоһонан "уяныпп", бөгөн донъяның иң алдынғы милләтенә әүерелгән. Үҙебеҙҙең тарихҡа әйләнеп ҡайтһаҡ, шундай уҡ күренештең шаһитыбыҙ: башҡорт халҡының рухи короле исемен яулаусы Зәйнулла ишан Рәсүлевтың "Рәсүлиә" мәҙрәсәһе шулай уҡ башҡорт милләтен күтәреү өсөн, уға тәбиғәт тарафынан һалынған интеллектуаль һәм физик потенциалды уятып, башҡорт автономияһы өсөн көрәшкә әҙерләгән. Башҡорт ғәскәре төҙөү тураһындағы фарман сыҡҡас, иң беренсе булып атҡа суфыйҙар атлана, Учалы районының Аҡҡужа ауылында әйтелгән зекер бөтә Башҡортостанға яңғырай. Юҡҡа ғына Әхмәтзәки Вәлиди: "Әгәр ҙә Зәйнулла Рәсүлев булмаһа, мин бер байҙың приказчигы ғына булыр инем", - тип әйтмәй. Ә бит ошо һүҙҙәрҙә Зәйнулла ишандың Башҡорт автономияһы төҙөүҙәге, Рәсәй Федерацияһына нигеҙ һалыуҙағы роле хаҡында әйтелә.**

**Милләтебеҙҙе уятыуҙа, бергә туплауҙа диндең әһәмиәтен мин фәҡәт ошолай итеп күрәм. Нимә генә тиһәк тә, халҡыбыҙҙың күңеле асыҡ булһа ла, йөрәге йоҡлай һаман. Ә инде уның йөрәге уянһа, беҙ әңгәмәлә һүҙ алып барған милләт алдындағы проблемаларға бөтөнләй урын ҡалмаҫ ине. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында беҙҙең рухыбыҙ ғына уянды, милли аңыбыҙ барыбер уяныпп бөтмәне...**

**Ф. Әхмәтшин:** "Кем дә кем ҡушҡанды үтәмәй, динен инҡар итә, улар бөтөрөләсәк", - тип әйтелә бер хәҙистә. Мин үҙебеҙҙең "Ваҡыт" гәзитенә яҙған бер мәҡәләмдә XVIII быуаттың халҡыбыҙ тарихында иң ҡанлы йылдар булыуы хаҡында һүҙ алып барҙым. Һәр бер ихтилал аҙағында һуңғы сиккә еткерелеп, инде ҡыйратылды, тигән халыҡ ун йылдан тағы ла ҡалҡып сыға алған. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында беҙҙә дини уяныу булманы. Бөгөн намаҙ уҡып, тулыһынса дин тотҡан башҡорттарҙың һаны мең ярым самаһы ғына. Шул уҡ ваҡытта Ислам динен тотҡан урыҫтарҙың һаны 100 меңгә яҡын. Рәсәй Федерацияһы етәкселегә башҡорттар дингә килмәһен өсөн шул тиклем күп көс түгә. Быны барыһы ла һиҙмәйҙер, ә бына беҙ, дингә килгәс, шуны һиҙә башланыҡ. Улар беҙҙең йөрәктең уяныу аҫҡысы диндә икәнлеген бик яҡшы белә. Үҙебеҙ генә белмәйбеҙ. Тотош милләт менән дингә ҡайтмауыбыҙҙың төп сәбәбе барыбер үҙебеҙҙә. Мөҙҙәтебеҙ етмәгәндер, бәлки. Беҙ үҙебеҙҙең алға күп кенә мәсьәләләр ҡуябыҙ, һәм уларҙы хәл итеү юлдары хаҡында уйлана башлаһаң, барыһының да осо дингә барып тоташа. XX быуатты алып ҡараған ваҡытта ла, беҙҙең һуңғы ишандарыбыҙ шәхес культында һәм Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булып, 70-се йылдарҙа Мөжәүир хәҙрәттәр баҡыйлыҡ күскәс, беҙ һан яғынан кәмеп, рухи ҡыйралыш кисерә башлағанбыҙ. Һуңғы ваҡытта, әлхәмдилуллаһ, башҡорттар, бигерәк тә йәштәребеҙ дингә ҡайта.

**Ә. Үтәбай: Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыл тулыуҙы байрам иткән саҡта Ҡаҙағстандан, Урта Азиянан килгән дин әһелдәре, ишандар беҙгә: "Һеҙ үҙегеҙҙең Ҡотбзаман булырлыҡ шәхесегеҙҙе белмәйһегеҙ. Һуңғы ике быуатта мосолман донъяһында ғына түгел, ғөмүмән, кешелектә Аллаһы Тәғәлә хозурына иң яҡын килә алған кеше - ул Зәйнулла Рәсүлев булған. Халҡығыҙға ғүмер һәм мәрхәмәт һораған ул. Һәм һеҙгә милләтегеҙҙең яҙмышын хәл итер өсөн дингә ҡайтыу фарыз. Беҙҙең атай-олатайҙарҙың да уҡытыусыһы булған ишан. Шуға күрә беҙ улдарыбыҙға һәм ейәндәребеҙгә Зәйнулла исемен ҡушабыҙ", тип әйтте. Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәндән һуң, Фәнзил, һин килтергән дәлилдәрҙең хәҡиҡәт икәнлегенә тағы бер тапҡыр инанаһың...**

**Фирҙәүес ХИСАМЕТДИНОВА**

***Беҙҙә ауылдан сыҡҡан һәм ҡала башҡорттары бар. Ҡасандыр ауылдан килеп, хәҙер 70-80 йәшен тултырыусыларҙың балалары һәм ейәндәренең күбеһе беҙҙең милләт вәкилдәре түгел. Уларҙан һуң Өфөгә килеүселәрҙең балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәре генә милләтебеҙҙең рухын үҙ итте. Шул уҡ ваҡытта хәҙер ҡалала үҫеүсе башҡорт йәштәре менән ауылдыҡылар араһында һиҙелерлек кәртә, айырымлыҡ барлыҡҡа килде. Улар һаман да уртаҡ тел таба алмай. Ауылдыҡылар ҡала башҡорт йәштәренең ҡыйыу сығыштарын, мәҫәлән, экстремизм күренеше тип баһалай.***

**(Дауамы 15-се биттә).**



Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ

# ҠОҺОР

Наҙгөл йәйге сәхрәне тәү күргәндәй ғәжәп ҡылды: Урал тауҙары ҡуйыны шундай хозур. Талғын ғына елдә хуш еҫле үлән, сәскәләр тибрәлә. Араһында ҡыҙарып бешкән ер еләктәре күренә. Күбәләктәр, бал ҡорттары сәскәләргә ҡуна, иңкештәр геүләй, һабаҡтарға, ботаҡтарға бөжәктәр, ҡарышлауыҡтар үрмәләй, ҡырмыҫҡалар үҙ юлынан ҡайҙалыр ашыға, ергә ҡорған ояларынан ҡошсоҡтар фырылдап осоп сыға...

Үҙенә бер асыш яһағандай, Наҙгөл уйланды: "Был фани донъяла көндәлек ығы-зығынан, мәшәҡәттәрҙән бушамаған әҙәми заттар йортонан башҡа тәбиғәт, тереклек йортиле лә бар. Был ил үҙ хәстәрлектәре менән мәшғүл. Беҙ уны яҡшылап күреп, белеп, нығыраҡ төшөнөп кенә етмәйбеҙ икән. Улай ғына түгел, был мөғжизәле, тылсымлы, нәзәкәтле донъяға, исмаһам, изгелек кенә лә итмәйбеҙ. Күпме сер һаҡлай ул, күпме сер..."

Үҙәктән, сылтырап ағып ятҡан көмөш шишмәнән һыу алып килә ятҡан ире Ҡабил Наҙгөлдө хис-кисерештәренән бүлде:

- Нимәгә шул тиклем хайран ҡалдың?

- Күрәһеңме, ниндәй йәмле беҙ йәшәгән ер! Ана, Өскүл, Оҙонкүл, ауылыбыҙ, сейә, еләк йыйған ҡыҙырымдарыбыҙ, уралып-уралып ятҡан Уралыбыҙ. Күккә ашҡым, осҡом килә!

- Һин күккә ашһаң, мин нишләрмен? Ергә төш, ергә. Һин барыһынан да йәмлерәкһең, сейәләрҙән, хөрмәләрҙән тәмлерәкһең.

Яҙын ғына йәрәшкән кәләшен ҡосаҡлап алды Ҡабил, сәстәренән, биттәренән үбеп, яғымлы итеп әйтте:

- Әле тәбиғәткә һоҡланып торор мәл түгел. Ҡаҙан аҫып, аш һалайыҡ та, төшкә хәтлем бер тына сабайыҡ. Йәме!

- Хәҙер, Ҡабил, хәҙер...

* * *

Наҙгөл оләсәһе тәрбиәһендә үҫте. Яратҡан ейәнсәрен гел үҙе менән бергә ҡырға, урманға алып йөрөнө ул. Бәғзе ауылдаштары атағанса, әллә ысынлап та хыялый инде оләсәһе - бал ҡорттары, бөжәктәр, ҡоштар, үләндәр, гөлдәр, ағастар менән һөйләшә, аңлаша:

- Иҫән генәме әле, сәхрә йортом! Әүәлгесә йәмлеһең, йәнлеһең. Беҙ генә ҡартайҙыҡ. Хоҙай насип иткәс, бына тағы һиңә килдек. Ейәнсәрем менән еләгеңде йыйырға рөхсәт ит инде...

Берәр туйыс бармаҡ башындай еләк йыйып, һыуһап, шишмә янына төштөләр. Оләсәһе сөңкәһен тотоп, шишмәгә өндәште:

- Һалҡын шишмәкәй, көн эҫеһендә тамаҡтарыбыҙ кипте, зинһар өсөн, һыуһыныбыҙҙы ҡандыр инде... Их, ҡайһылай саф, тәмле һинең һыуың, тәнгә - шифа, йәнгә - ләззәт...

Ҡыҙыҡ та, сәйер ҙә. Хискә иҫереүме, ихласлыҡмы, теләкме, әллә башҡалар белмәгән, төшөнмәгән серме был? Наҙгөл ғәжәп ҡалып һораны:

- Ниңә ҡош-ҡорт, болон-туғай, йылға-шишмә менән һөйләшәһең, уларҙан рөхсәт һорайһың ул, оләсәй?

- Ерҙәге һәр нәмәгә шәфҡәтле булыу фарыз, ҡыҙым. Хатта анау таш өҫтөндә йылынып ятҡан йыланға ла.

- Шул имәнес, шөкәтһеҙ нәмәгәме? Ҡайҙа, таш тәмейем шуға.

- Сеү, балам! Именлегеңде боҙма! - тип һағайҙы оләсәһе һәм доға уҡырға кереште: "Эй, Раббым! Ниғмәтеңдең ҡапыл бөтөүенән, һин биргән именлектең, һаулыҡтың, ҡоттоң китеүенән, көтмәгәндә ҡайғы-хәсрәт килеүҙән һәм башҡа ҡазаларҙан, ғазаптарҙан һаҡла!" Шунан тынысланып, әйтте:

- Яманмы, яҡшымы, һәр йән эйәһенең йәшәү рәүеше бар. Үҙең теймәһәң, йылан саҡмай ул. Беҙҙең кеүек үҙҙен яҡлай алмай бит. Зыяны теймәгән йыланды үлтерергә ярамай, бигерәк тә аҡ йыланды.

- Үлтерһәң, нимә була?

- Ҡарғышы төшә, йәшәүҙең, ғүмерҙең ҡото китә.

- Нисек китә?

- Хәҙер мин һиңә бер хикәйәт һөйләйем, шунан аңларһың, ҡыҙым.

Борон ауылыбыҙҙың осонда, башҡаларҙан ситтәрәк урында, бер ырыуҙашыбыҙ ғүмер иткән. Кәртә-ҡураһы тулы мал, көнитмеше ғәйәт етеш булған. Донъяһының ҡото - йорт нигеҙендә мыжғып торған йыландар икән. Яҡындағы һарыҡташлы сауыллыҡта төләгәндә һыҙырып һалған ҡауҙары ла ятҡан. Кешегә бик һирәк осраған йылан батшаһы ошо урында аҡ киндергә мөгөҙөн ҡалдырған, ә ҡәрҙәшебеҙҙең бабаһы уны муйынына тағып йөрөгән, шуға ла ҡот, бәрәкәт килгән, был йылы ергә йыландар эйәләшкән, имеш. Улар ҙа, йорт эйәләре лә бер ниндәй яуыз, мәкерле эш ҡылмаған, бер-береһенә ныҡ күнеккән. Һыйыр малы, йылҡы ныҡ үрсегән. Йыландар һыйырҙарҙың арҡаларында ятҡан, мөгөҙҙәренә, ҡойроҡтарына уралып торған. Һауын һыйырҙарҙың, бейәләрҙең имсәктәренән шишмә кеүек һөт урғылған. Ҡатын-ҡыҙҙар батман-батман май яҙған, күнәк-күнәк ҡымыҙ бешкән. Аҡ май, һары май, баллы май, сейәле май, тоҙло май менән ҡар-баҙҙар тулған.

Йылан мөгөҙөнөң ырыҫы бөтмәҫ-төкәнмәҫ кеүек тойолған. Шулай ғүмер аҡҡан, хужалар олоғайған, бер көн хужабикә донъялыҡтан киткән. Ире икенсе ҡатынға өйләнгән. Ул иһә аяҡ аҫтында һөйрәлеп йөрөгән йыландарҙан ендән ҡурҡҡандай ҡурҡҡан, көн оҙоно сар-сор килгән. Абайламай ситеген кейһә, эсендә ятҡан йыланға баҫҡан һәм йөрәге ярылып үлгән. Был хәбәр тирә-яҡҡа таралған. Ируҙаман ҡайтанан ҡатын әйттергән, димләтеп тә ҡараған. Мәгәр йыландарынан шөрләп, бер кем дә ризалыҡ бирмәгән. Тамам йәне көйгән ир, зиһене томаланып, күңеле ағыуланып, утынлыҡта түмәргә уралып йоҡлап ятҡан йыланды туҡмап үлтергән. Бының менән генә асыуы ҡанмай, тағы ла нығыраҡ ярһып, зәһәрләнеп, йылан арбаусылар саҡырған һәм нигеҙ йыландарын ҡыуҙырған. Йыландар иҫ китмәле күп сыҡҡан, баштарын сәкәйтеп, ыҫылдашып, асыу сәсеп, күсеп киткән. Юлдарына дүрт йыл үлән үҫмәгән.

Йыландар менән бергә йорттан ҡот та киткән. Был урынға уларҙың ҡәһәре төшкән. Ир уҙаманы ҡарғышлы ҡолға әйләнеп, донъяһы гел кирегә тәгәрәгән, малы ҡырылған, көнө бер ҡорсаңғы бейәгә тороп ҡалған. Шул бейәһен менеп, йортон ташлап, ул йыландар кеүек ситкә сығып киткән. Ҡырҙа ҡаңғырып йөрөп, толҡа таба алмай, кире әйләнеп ҡайтҡан, бер рәхәтлек күрмәгән. Йоҡлап ятҡан йыланды үлтергән сағында йылан һары аяғын сығарып күрһәткән булған. Был - һары һағышҡа, ҡайғыға икән. Ул балаларын да эҙәрләгән. Оло улының башына ағас ҡолап, ауырыуға тарыған. Икенсеһен аяҙ көндө йәшен атҡан. Өсөнсөһө Себер китеп олаҡҡан. Ейән-ейәнсәрҙәре лә бер-бер артлы үлеп, зат-нәҫеле ҡороған.

- Оләсәй, йыландың аяғы буламы ни?

- Ырым буйынса, йыландың аяғы бар имеш тә, тик иң бәхетле кешегә генә күренә һәм ул ныҡ байып китә, имеш. Мәгәр йылан аяғының алһыу төҫтәгеһе - ауырыуға, ҡыҙылы - үлемгә, һарыһы - һары һағышҡа, ҡайғыға, тиҙәр. Йәшеле, күге лә була, тип һөйләйҙәр. Үткер, уҫал, хәйләгә ныҡ өйрәнгән кешене "йылан аяғын киҫкән", тип ебәрәләр. Мин, ҡыҙым, аманат итеп һиңә шуны әйтәм: һәр йән эйәһе - Алла мәхлүге, шуға ла уларға сәбәпһеҙ яманлыҡ ҡылырға ярамай, беҙҙең бит ырыуыбыҙҙың исеме лә - Йылан.

Оләсәһенең һүҙҙәрен үтәргә тырышһа ла, Наҙгөл йыландарҙы күңелгә шом һалған ытырғаныс нәмә итеп кенә күрҙе. Мәгәр үҫә, буйға етә бара, йыландарҙан бигерәк, шәфҡәтһеҙ, рәхимһеҙ ҡәрҙәштәрҙән нығыраҡ һаҡланыу зарурлығын төшөндө. Улар үҫемлектәр донъяһын да, тереклек донъяһын да йәлләмәй.

* * *

Талғын елдә тулҡынланып ятҡан болонға һоҡланып торҙо ла Наҙгөл наҙлы ғына өндәште:

- Эй, ошо хозур ерҙең эйәһе, зинһар өсөн, үләнеңде сабырға рөхсәт ит! Мал-тыуарыбыҙға ҡышҡылыҡҡа бесән кәрәк. Һыйырыбыҙ мул итеп аҡ эйһен, шифалы ризыҡ бирһен!

- Оләсәйең һымаҡ, әллә һин дә хыялый инде. - Ҡабил мәрәкәләгән кеше булып, ялланды яңғыратып көлөп ебәрҙе.

Наҙгөл иренең төрттөрөүенә иғтибар итмәй, ҡолас киреп саба башланы. Үткер салғы шый-шый итә, ялмап йота. Дәртле һелтәм менән ҡыйылған үлән, ҡайырым булып буйға һалынып, күпереп ятып ҡала. Ҡабил әллә ни арала ҡайырымдың осона сыға ла, кәләшенең артынан төшә. Ире баҫып, тапап килгәс, Наҙгөл ҡаушай. "Үксәңде, үксәңде", - тигәс, үткәреп ебәрә. Дарманы ташып торған сағы шул уның. "Бына мин ниндәй шәп, ғәйрәтле", - тип, үҙен танытыу сәме лә барҙыр. Ана, нисек киң алдырып, ерҙе ҡырып саба. Алдынан пырлап бер ҡошсоҡ осоп китте. Ҡабил быға иғтибар итмәне, оҫоллоғон күрһәтергә теләгәндәй, оторо ҡыҙып, ярһып, салғыһын һелтәүен белде. Ҡапыл үҙәк өҙөп, нимәләрҙер сип-сип итеп ҡалды. Наҙгөл "аһ" итте: ояларын туҙып, салғыға ҡыйылып, ҡош балалары ята...

- Ҡарабыраҡ сапһаң, ни булла!

- Юҡҡа көйәләнмә, ҡырҙа сәпсек, беснәк бөткәнме?

- Бөтөү-бөтмәүҙәме ни ғилләһ?..

Бер уратымды сапҡас, бер аҙ ял итергә туҡтанылар. Наҙгөлдөң тәне һаман да эҫеле-һыуыҡлы, күңеле тулы шом. Йән тыныслығы тапмай, аш ҡуйған урынға барҙы, усаҡҡа утын өҫтәне, утҡа бағып торҙо. Бер аҙ борсолоуы, хафаһы баҫылып, салғыһын ҡулына алды.

Тәбиғәт һаман әүәлгесә: ҡояш йылмая, күбәләктәр сәскәләргә ҡуна, иләүҙәрендә ҡырмыҫҡалар мәж килә... Тик яңғыҙ беснәк кенә әсенеүле сипылдап, бер тирәлә өйөрөлөп оса. Инә ҡош ояһын, балаларын эҙләй. Уларҙың ниндәй фажиғәгә тарығанын аңламай шул, меҫкенкәй.

Йәнә бер ҡайырымды сыҡҡас, Ҡабил яңыһына төшөп, Наҙгөлөнә күҙ һалды. Салғы һелтәгән ыңғайға осаһы ымһындырғыс ҡыймылдай. Сәскәле йәйге күлдәген ел уйната. Хур ҡыҙыныҡылай һомғол һыны сағыу ҡояш яҡтыһында үтә күренеп, әллә ниҙәр уйлата. Хистәрен тыйып тота алмай, Ҡабил кәләшенә ынтылды, уның нескә биленән ҡосоп, күңел биләгес муйынын, беләктәрен үбергә кереште. Көслө тойғонан ашҡынған ир ҡатынын мендәр һымаҡ күпереп торған, хуш еҫ аңҡытҡан үләнгә һалды. Шул саҡ Наҙгөлө тертләп, сәрелдәп ҡысҡырып ебәрҙе: "Йылан! Йылан!" Ҡабил боролоп ҡараһа, ысынлап та, йылан шыуышып китеп бара. Әллә Наҙгөлөн йыҡҡан урында ятҡан инде? Асыуы ҡабарған ир һикереп торҙо ла, йәһәт кенә салғыһын алып, төйҙәһе менән ныҡ итеп йыландың башына төрттө. Йылан әйләнде-тулғанды ла һыртына әйләнеп ятты. Ҡабилдың күҙенә уның сысҡан тәпәйҙәре һымаҡ һары аяҡтары күренеп ҡалғандай булды.

Наҙгөлдөң табын әҙерләгәндә лә баяғы ҡурҡыуы үтмәгәйне әле. Бына ул ашъяулыҡҡа икмәк телеп һалды, тоҙ, ҡорот ҡуйҙы, ҡаҙандан ит һоҫоп, биш бармағын бешерә-бешерә, уны өләштәргә бүлде. Туҫтаҡтарға һурпа ҡойоп, ирен саҡырҙы.

Ҡабил: "Ай-һай, көн ҡыҙыу", - тип, тирен һөрттө лә бер сүмес айран һемерҙе, күлдәген сисеп, һалҡынса һыу менән ҡойондо. Кәләшен ҡайындар араһында сисендерергә теләп: "Ҡайһылай рәхәт! Ҡайҙа һине лә ғөсөлләндерәйем, сафландырайым", - тигән булды. Наҙгөл: "Аш һыуына ла һуң", -

**✓ Ҡабил тертләп уянды һәм көләшенең ауыҙына инеп барған йыланды шәйләп, шаҡ ҡатты. Был ни ғилләү? Өнмө, төшмө? Юҡ, төш түгел, ысынбарлыҡ был.**



тип, ипле генә баш тартты. Шым ғына туҡландылар. Тамаҡ туйғас, Наҙгөл һауыт-һабаны сайҙы ла, келәм йәйеп, ял итергә ятты. Тәне ауырайып, күҙҙәре йомолоп бара. Бер ҡосаҡ үләнгә башын терәүе булды, ойоп та китте. Сәхрәлә ҡатыны менән яҡынлыҡ ҡыла алмауына йәне көйөп, Ҡабил күләгәле урынға кейеҙ бырағытты һәм көрһенә-көрһенә шунда һуҙылды.

* * *

Ер тишегенән юғары тартылып, ата йылан тирә-йүнгә баҡты, бер аҙ ҡатып торҙо һәм көксәйеп, уҫал ысылданы. Йәнәше башы йәнселеп, иҙелеп ята... Хушлашҡандай, ул бөгәрләнеп-бөгәрләнеп, инә йыланға ураланды-һырғаланды, шунан ҡойроғонан тешләп, уны иләүгә табан һөйрәне. Бер аҙҙан мәхлүкте мәж килеп ҡырмыҫҡалар һырып алды.

Ата йылан бер ни белмәй серем иткән салғысылар янына шыуышты. Ана, тәбиғәткә, тереклеккә фәҡәт мин хужа, тип көн иткән, нимә теләгән, шуны эшләгән әҙәм ирәйеп, һуйҙайып ята. Йылан, башын сәкөйтеп, алыҫтан уҡ уға төбәлде: "Ағыуымды сәсһәм, бер ни белмәй йән бирер. Юҡ, ул үҙенең яуызлығы өсөн яҡты донъянан ҡараңғы донъяға анһат ҡына китергә тейеш түгел, янырға, көйөргә, интегергә, михнәт сигергә тейеш. Иң ҡәҙерлеһенә, йән һөйгәненә зыян ҡылып, ҡон ҡайтарайым, һарыға һабыштырайым".

Йылан бәзрәйеп Наҙгөлгә текәлде: "Ғәжәйеп күркәм зат! Асылып киткән иҙеүенән нәфис түштәре күренеп, һулыш алғанда ҡалҡып, тибрәлеп, зиһендә биләй, иркәләргә әүрәтә. Ҡыйғас ҡаштары, елә̧с елдән һибелеп киткән сәстәре уны тағы ла серлерәк, гүзәлерәк итә". Ындай йәмде боҙорға йөрьәт итмәй, ҡан ҡоҫауса ир яғына һуҙылды: "Яһилдың үҙенә ыҫ итәйем дә ҡуяйым. Яуызлығына күрә - язаһы. Фуф-фуф, кейеҙенән, кейеменән ат еҫе килә". Ерәнеп, башын борҙо: "Мин бит ир енесенән, гүзәл затка әйә булайым". Ошо ниәтенән нәҙек оҙон кәүҙәһен уйнаҡлатты ла йәнә Наҙгөлгә тексәйҙе. Йылан арбауынан, ҡөҙрәтенән иҙрәп, йоҡо ныҡыраҡ баҫып, Наҙгөлдөң ирендәре сәскә тажы һымаҡ асылды.

Шул саҡ сыҡратып ат кешнәп ебәрҙе. Ҡабил тертләп уянды һәм көләшенең ауыҙына инеп барған йыланды шәйләп, шаҡ ҡатты. Был ни ғилләү? Өнмө, төшмө? Юҡ, төш түгел, ысынбарлыҡ был. Башҡа берәү һөйләһә, билләһи, имеш-мимеш, тиер ине. Әле әҙәм ышанмаҫ күренеште үҙ күҙҙәре менән күрҙе. "Имәнес нәҫтә көләшенең эсендә, ғүмере йәшәү менән үлем араһында!" Был уйынан Ҡабилдың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

- Наҙгөл, Наҙгөл, - тип өндәште Ҡабил. - Тор инде, тор.

Наҙгөл баҫлығып, байтаҡ уяна алмай ятты һәм, ниһайәт, күҙҙәрен асып, хәлен тәфсирләне:

- Арып-талып, тамағым кибеп, шишмәнән һалҡын ғына һыу эсәм икән тип төшәнәмсе. Эсем дә өшөгәндәй. Шул арала әллә ер һалҡыны тейҙе инде.

- Һалҡын айран минең дә быуындан алды, буғай. Тәнем зембәрҙәп, башым ауыртып тора, - тип хәйләләште Ҡабил. - Әйҙә, ҡайтайыҡ, мунса яғып төшәйек. Олә̧саңдең мунсаһы сихәтле була торған.

* * *

- Ҡояш нуры ла һүрелмәгән, күк салт аяҙ. Бар халыҡ ҡырҙа, ә һеҙ ҡайтып та килгәнһегеҙ. Көн ҡыскә ауышҡансы сапмай. Быны ел-ғыуарҙар, - тип шелтәләп, ризаһыҙ ҡаршы алды оләсәй.

- Ауырһынып торамсы, нинәләр йоҡо ла баҫа, ғүмерҙә булмағанды. Тиргәмә инде, оләсәй, иртәгә энер төшкәнсе сабырбыҙ, - тине Наҙгөл аҡланып.

- Улайһа, төпкә бүлмәгә инеп ятып тор, балам, ә беҙ кейәү менән мунса хәстәрләйек.

Ҡабил менән икәү генә ҡалғас, оләсәй әүлиә һымаҡ һиҙенеп һораны:

- Ни хәл булды Наҙгөл менән? Йәшермәй генә һөйлә.

- Үҙем әйтергә тора инем. Төш мәлендә ял итеп ятҡанда, ни...

- Йә, йә, һуҙма!

- Наҙгөлдөң... Наҙгөлдөң эсенә йылан керҙе.

Оләсәйҙең йөҙө ҡара ҡойолдо:

- Йә, Хоҙа! Аҡ күнелле баланың ни гәйебе? Кем ҡарғышы төштө башына?..

- Мин... Мин... Йылан үлтерҙем сабынлыҡта. Быныһы, күрәһең, үс итеп...

- Яҡшыға илтмәй шул ул яһиллыҡ. Әҙәм сырхауы бер ғиләттер, халыҡ сырхауы яһиллыҡтыр.

- Ҡалаға больницаға алып китәйем микән әллә Наҙгөлде?

- Ниндәй бәлнис? Торма йән көйөгө булып һерәйеп, йыланды сығарайыҡ үҙебеҙ Наҙгөлгә эркет эсереп.

Наҙгөлдө уятып, мунсаға алып барҙылар. "Иншалла, сихәте булһын", - тип, шифаһын маҡтай-маҡтай, оләсәй Наҙгөлгә эркет һыуы эсерҙе. Төрләсә им-том итеп, уның эсенә ҡулын ҡуйып укыды: "Бисмилләәһ. Бисмилләәһ. Бисмилләәһ. Балама килеп юлыҡҡан яуызлыҡ һәм әрнеүҙәрҙән арынып, Аллаһын, һинең бөйөклөгөңә, көсҡөҙрәтеңә һыйынам..."

Наҙгөл ләүкәлә йоҡоға талды. Шым ҡалдылар, йөрәктәр генә дөп-дөп тибә. Бик оҙаҡ ваҡыт үтте һымаҡ. Ҡапыл йылан күренде. Албыр-ғап, ҡалтырап, Ҡабил аңғармаҫтан урындыҡтан мунса сүмесен бәреп төшөрҙө. Шаҡ иткән тауышҡа һиҫкәнеп, йылан кире тартылды.

- Ҡаршылыҡ тыуҙы, сыҡмаңы, ҡоһоро ебәрмәй, - тине оләсәй бошоноп. - Инде икенсе әмәлде ҡылып ҡарайыҡ. Кейәү, бар, атыңды үргә ҡарай тиргә төшөргәнсе ҡыу. Шунан ошо сүмескә бер сөңкәләй тирен һығып ал да йәһәт кенә индер.

Ҡабил йәшереп ҡуйған шешәһенән араҡы һемерҙе лә, туғарылмай торған бейәһен: "На-на! На-а-а!" - тип ярһып сыбыртҡылап, Мәңрәү тау һыртына ҡарай ҡыуҙы. Көн яман эҫе, ҡурып алып бара. Саба торғас, бейә шыбыр тиргә батты. Әйләнеп килеп, Ҡабил бейәнен йорт эсенә индерҙе лә тирен ус ҡырыйы менән сүмескә һыпырҙы, уны яулыҡ аша һөҙөп, мунсаға йүгерҙе.

Ҡарсыҡ йәнә доға уҡыны: "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим. Ауырыған ваҡытта Аллаһ шифа бирер. Аллаһым! Әй, инсандарҙың Раббыһы! Сирҙәрҙе юҡ итеүсе, ауырыуҙы бөтөрөүсе шифалыр. Ҡыҙымды сәләмәтләндереүсе тик Һин генә. Һинән башҡа уға еңеллек килтереүсе һис кем юҡ. Аллаһым! Бер ҡолона дауа бирсе!" Шунан ат тирен өрөп имләп: "Эс, балам, зинһар, эс", - тип, ейәнсәренең ауыҙына ҡойҙо. Үҙ алдына ниҙер уҡып, тылсымлы һүҙ, сихри көс менән тәьсир итеп, күңелен биләне. Наҙгөл бер ни белмәй йоклап китте. Был юлы йылан оҙаҡ көттөрмәне, йылп итеп килеп сыҡты ла иҙәнгә барып төштө. Шуны ғына көткән Ҡабил уны ҡыҫҡыс менән эләктереп, тоҡҡа тыҡты һәм тышҡа атылды. Урамда, күп уйлап тормай, тоҡ өҫтөнә күтәргеһеҙ яҫы таш орҙо.

Ҡабил ләүкәлә бер ни белмәй йоҡлап ятҡан Наҙгөлөн киндер япма менәнябып, өйгә күтәреп алып ҡайтты һәм мамыҡ түшәкле караватҡа һалды. Мунсанан сыҡҡанда оләсәһе доғаһын уҡып ҡалды: "Ҡыҙымды сафландырған, уға сәләмәтлек биргән Аллаһҡа маҡтау булһын".

* * *

Оҙон керпектәрен елпеп, Наҙгөл күҙҙәрен асты. Бүлмәгә хозур яҡтылыҡ һибелә, асма тәҙрәнән еләҫ һауа бөркөлә, һандуғас моңо күңелде наҙлай... Хәс тә йәннәттә ятҡан һымаҡ. Рәхәт... Иртәнге йәмдән мәхрүм ҡалмаҫҡа, Наҙгөл тышҡа атлыҡты. Оләсәһе, ғәҙәттәгесә, таң һарыһы беленеү менән торған, ҡояшты ҡаршылап, үҙенә, ейәнсәренә иҫәнлек-һаулыҡ теләй:

Эй, Тәңрем, тәнемде һаулыҡта тот!
Эй, Тәңрем, ҡолаҡтарымды һаулыҡта тот!
Эй, Тәңрем, күҙҙәремде һаулыҡта тот!
Эй, Тәңрем, ҡул-аяҡтарымды һаулыҡта тот!
Эй, Тәңрем, үпкә-йөрәгемде һаулыҡта тот!
Эй, Тәңрем, эс-бауырымды һаулыҡта тот!
Эй, Тәңрем, йәнебеҙҙе паклыҡта тот!
Эй, Тәңрем, берҙән-берем! Һаҡла беҙҙе!

- Һаумы, таң! Һаумы, ҡояш! Хәйерле иртә, оләсәй!

Оләсәһе ейәнсәренә ҡарап йылмайҙы. Мәгәр йөҙө әүәлгесә нур бөркмәй. Әллә ауырыҡһынып тора инде? Кәүҙәһе лә бөрөшөп киткәндәй. Күңелен ниндәйҙер хис-кисерештәр баҫҡанға оҡшай. Бағым бағып, күрәҙәлек итеп, ниҙер тойоп хафаланған микән?.. Наҙгөл көйәнтәһен, күнәктәрен алып, һыу юлына ыңғайланы. Оләсәһе, таң һыуынан сәй тәмле була, ти. Саф, һалҡын шишмәлә битен, ҡулын йыуҙы ла, һауыттарын мөлдөрәмә тултырҙы.

Ҡайтып инһә, Ҡабилы ҡобараһы осоп күтәрмәлә ултыра. Әйтерһең, төн буйына енпәрейҙәр менән ҡотторған, дәрт-дарманын ҡороҡҡан үле һыу йотҡан. Яйы сыҡҡан һайын Наҙгөлдө шаярта, уның бөйөрөнән тотҡолай торғайны. Төн сыҡҡансы алмаштырып ҡуйғандармы ни, бөтөнләй өнһөҙ ҡалған.

- Нимә булды һиңә, балтаң һыуға төшкән кеүек ултыраһың? - тип, Наҙгөл ирен иҫләндерҙе.

- Яман төш күрҙем.

- Ниндәй төш?

- Ыҫылдашып йыландар баҫтырҙы. Өнөмдә икән тип торам.

- Кисә үҙең үлтергән йыландың ғиләһелер...

Ҡапыл Ҡабилдың мейеһен зәһәр уй телеп үтте: "Наҙгөл - эсенә йылан кергән бисә! Эсенә йылан кергән бисә!.." Был кисерештән ирҙең йәне үртәлде, күңелен ҡыҙғаныу, яман көнләшеү, әсенеү тойғоһо биләп алды, көнсөлләгө ғишҡының тоҙо булып ҡатты. Наҙгөлө уға йылан менән хыянат ҡылған һымаҡ тойолдо. Ир енесле йылан ҡатын-ҡыҙ затына эйәләшә, тиҙәр бит. Ҡабил шешенән табип, кисәгенән ҡалған "шайтан һыуы"н ғолҡолдатты.

Иртәнге сәйҙән һуң Ҡабил теләр-теләмәҫ кенә бесәнгә барырға әҙерләнде. Һул аяҡтан торғандай, эше тиҫкәрегә китеп тик торҙо: салғыға бармағын ҡырҡты, ҡамытты кире яғы менән кейҙерҙе, бейәне тәртә араһына кермәй ҡаршылашты, арбаһының тәжеһе ысҡынды, шунан ҡамыт бауы өҙөлдө... Хужа ҡаты итеп, инәһе-атаһы менән һүгенде. Ғүмерҙә булмағанса ыҙалап, ниһайәт, атын егеп бөттө. Ризыҡ күтәреп, Наҙгөл дә өйҙән сыҡты. Яй ғына ҡуҙғалдылар, шым ғына барҙылар. Бөгөн Ҡабилдың хис-тойғолары урғып тормай, йәй уртаһында ҡырау төшкәндәй, күңеле һалҡын, йөрәге туң.

Сабынлыҡҡа еткәс, Ҡабил ашыҡмай ғына атын туғарҙы ла үлән юшарға арҡанланы. Салғыһары арлы-бирле генә тапап һәм янып, сабырға төштө. Бөгөн һелтәме дәртһеҙ, шәплегеп, ғәйрәтен күрһәтеү сәме юҡ. Юлдан сыға ла ултыра, сыға ла ултыра. Әйтерһең, кемдер елеген, көс-ҡөҙрәтен һурған, йәшәү дәртен бөтөргән. Бер төн эсендә ир арыҫланынан ир йоратына әйләнгән Ҡабил.

Төш етер-етмәҫтән сәйгә туҡтанылар.

- Атың юшамай, башын эйеп тик тора, ҡара әле, ҡара, - тине Наҙгөл.

Ыҫынлап та, бейәһе утламай, бер туҡтауһыҙ уфылдай, ауыр итеп тын ала. Мороно ныҡ ҡына шешкән.

- Инәндең... - Ҡабил яман итеп һүгенде.

Тауышҡа Наҙгөл дә йүгереп килде.

- Моронон әллә һағыҙаҡ саҡҡан инде?..

Шеш ҙурайғандан ҙурайҙы, һәм бейә тын ала алмай, күҙ алдында ятты ла үлде.

- Уны һағыҙаҡ түгел, йылан саҡҡан, йылан, - тип Наҙгөл сеңләп илап ебәрҙе. - Йылан ҡарғышы эҙәрлекләй беҙҙе, йылан ҡарғышы...

* * *

Наҙгөлдөң әйткәне дөрөҫкә сыҡты - бәлә артынан бәлә, ҡаза артынан ҡаза килеп кенә торҙо: һөтлө һыйырҙары ярҙан ҡоланы, Ҡабилдың һалып ятҡан яңы өйө янып, көлгә ҡалды, хатта тауыҡ себештәре ҡырылып бөттө, кәртәлә мал әҫәре ҡалманы. Ҡабил инә эскегә һабышты, тире лә һөйәккә генә ҡалды. Наҙгөл ныҡ орошҡандан, эскендә ҡуймаһан, башҡа һинең менән йәшәмәйем, тигәндән һуң, ялға ҡайтҡан ағаһына эйәреп, Себер сығып китте. Унда ла йәлсемәне, туҡмалып, таланып, йолҡош хәлендә ҡайтып йығылды.

Ауылда туйға әҙерләнәләр ине. Ҡабилдың һеңлеһе кейәүгә сыға. Ҡыҙ ҙа, егет тә бәхетлеләр, ярашып ҡауышалар, пар аҡҡоштар кеүек матурҙар. Уларға һоҡланып туймайҙар. Ҡабилдың да күңеле күтәрелде, һеңлеһенә ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләгеһе килде. "Иркәм, - тине ул итәғәт кенә. - Кейәү күсереп алып киткәнсе ер-һыу менән хушлаштырып йөрөтөп килтерәйем. Әйҙә!" Туғандарының ай-вайына ҡарамай, һеңлеһен күршеһенең иҫке генә йөк машинаһына ултыртып, ҡырға алып сыҡты. Һыуыҡбилгә күтәрелделәр. Күсер ҡыҙ хушлашыу билгеһе итеп йәмйәшел ҡарағайға ал таҫма бәйләне, күҙенән йәштәр субырланы. Ауылға табан оҙон тау юлынан төшкәндә машина ел арбаһы һымаҡ елде. Ҡабил тормозға баҫты, ләкин тиҙлек кәмемәне.

- Тормоз тотмай, тормоз! - тип бар көсөнә ҡысҡырҙы Ҡабил. - Һикер, иркәм! Һикер! Хәҙер түңкәрeләбеҙ.

Үҙе лә ырғыны. Күҙ асып йомған арала машина әллә нисә мәртәбә әйләнеп, йәмшәйеп, йырынға осто. Ҡабил, ҡото алынып, һеңлеһе янына уҡталды. Ул ҡымшанмай ҙа ҡырлас таштар өҫтөндә ята, сикәһенән ал ҡан тама... Яман шомдан Ҡабилдың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте, мейеһен үлем шауҡымы шаңҡытты.

- Мин ҡәбәхәт! Мин шаҡшы! Минә аяу юҡ! - Аянысла һөрәнләү тауҙарҙа яңғырап, кешеләрҙе, йәндәрҙе тетрәтте.

- Хуш, иркәм! - тине лә, Ҡабил тәрән ятыулы йылғаға атылды, йөҙә белгәс, батманы. Ярға сыҡты ла кеше күҙенә салынмай ғына ат аҙбарына ыңғайланы, унан бау эҙләп табып, урманға инеп юғалды...

Наҙгөлдөң кинәт кенә өҙөпөҙөп йөрәге һулҡылданы һәм шул ыңғайы эсендә йән эйәһе ҡыбырланы...

ИНТЕРНЕТТАН



# ДӨРӨҪ ТУҠЛАНМАҺАҢ...

## әфлисун һуты эс

■ Торонто университеты ғалимдары белдереүенсә, даими рәүештә тиҙ әҙерләнә торған аҙыҡ ашау психик сәләмәтлеккә лә насар тәьсир итә. Тиҙ туҡланыу рестарандарына йыш йөрөгән кешеләр түҙемһеҙгә, тиҙ ҡыҙып барыусанға, һаранға әйләнә, имеш.

■ Тәмәке тартыу күреү һәләтен юғалтыуға килтереүе ихтималлығын беләһегеҙме? Калифорния университеты эксперттары билдәләүенсә, тәмәке тартыу йәйләп һуҡырайыуға килтереүе бар. Етмәһә, бындай насар ғәҙәт менән яфаланыусыларға увеит менән сирләү ҡурҡынысы ла янай. Унын төп билдәләре: күҙҙәрҙең ҡыҙарыуы, яҡтылыҡтан ҡурҡыу, насар күрә башлау. Тәмәкеселәр катаракта менән дә йышыраҡ ауырый.

■ Баланың уйынсыҡтары унын киләсәгенә лә йоғонто яһай ала икән. Филадельфияның балалар үҙәге пластилинды иң идеаль уйынсыҡ тип тапҡан. Белгестәр фекеренсә, бала 3-5 йәштә аралашырға өйрәнә, тирә-яҡ донъяны танып белә. Ә пластилиндан төрлө һындар әүәләү баланың аны үсешенә ярҙам итә. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы балалар көн һайын әүәләү менән шөғөлләнгән һәм тиҙерәк хәрефтәрҙе таныrға һәм ижектәр төҙөргә өйрәнгән. Уларҙың телмәре яҡшырған һәм логопед ярҙамы бөтөнләй кәрәк булмай сыҡҡан.

■ Ҡатын-ҡыҙҙар көүҙәһен һомғол көйө һаҡларға теләһә, көнөнә 1 сәғәт тирәһе спорт менән шөғөлләнергә тейеш, тип иҫәпләй Гарвард ғалимдары. Физик күнекмәләр бынан аҙыраҡ булһа, файҙаһы теймәй икән. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, аҙнаһына ете сәғәт шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙ ғына яҡшы һөҙөмтәләргә ирешә алған.

■ Әгәр ҙә һеҙ дөрөҫ туҡланмайһығыҙ йәки көн һайын тиҙ әҙерләнә торған ризыҡ менән сикләнәһегеҙ икән, мотлаҡ әфлисун һуты эсегеҙ. Буффало университеты эндокринологтары әфлисун һуты ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай, тигән һығымтаға килгән. Был һут профилактик үҙенсәлеккә эйә. Иртәнге аш ваҡытында 1 стакан әфлисун һуты эсеүселәрҙә организм өсөн файҙалы иркеле радикалдар кимәле 47 процентҡа күтәрелгән һәм ҡан тамырҙары нығынған.

■ Органик сүп-сар һаҡлау сәләмәтлек өсөн зарарлы, тип иҫкәртә Берлиндың Йоғошло сирҙәр һәм пневмология клиникаһы табиптары. Сүп-сар тарҡалған саҡта барлыҡҡа килгән бәшмәктәр тәьҫире һөҙөмтәһендә тире һәм тын юлы сирҙәре барлыҡҡа килеүе ихтимал. Хатта сүп биҙрәһенең ҡапҡасын асҡан мәлдә лә бәшмәк спораһы осоп, үпкәгә зыян килтереүе мөмкин. Бәшмәктәр аллергия, астма һәм лихорадка сирҙәренең сәбәпсеһе була ала.

■ Көнбайышта иртәнге аш ваҡытында ҡоймаҡҡа саған сиробы ҡушып биреү киң таралған. Бактиһән, саған сиробы яман шеш, бактериялар, диабетҡа ҡаршы көрәшеүсе антиоксидант булып тора икән. Унда шулай уҡ ҙур күләмдә цинк, тиамин һәм кальций бар. Сиропты гел ҡояш нуры төшөп торған ағас ҡайырыһынан эшләйҙәр.

ҺАБАҠТАР

# ЮҠ-БАРҒА БӨТӨРӨНӨП...

## ғүмереңде ҡыҫҡартма

**Күптәр юҡ-барға ла асыуланып йәки борсолоп, бөтөрөнөп барыусан. Тора-бара уларҙың был ҡылыҡтары алама ғәҙәткә әйләнеп китә. Әгәр ҙә һеҙҙең бындай сифатығыҙ бар һәм һеҙ тынысыраҡ йәшәргә теләйһегеҙ икән, түбәндәге бер нисә кәңәшкә ҡолаҡ һалығыҙ.**

**Проблемалар килеп сыҡҡас та хәл итегеҙ.** Үткәндәр өсөн дә, киләсәк өсөн дә ҡайғырмағыҙ! Тик бөгөнгө көнөгөҙҙө уйлағыҙ, әлеге ваҡытта һеҙгә нимә кәрәк, шуны хәл итегеҙ. Был һеҙҙең киләсәгегеҙҙе ҡайғыртыуығыҙҙы аңлата ла инде. Бөгөнгө көндө матур итеп үткәрһәң, киләсәгең дә өмөтлө булыр. Һәр иртән үҙегеҙгә, бөгөн көнөм яҡшы һәм файҙалы уҙһын өсөн барыһын да эшләйем, тип әйтегеҙ. Үҙегеҙҙең тормошоғоҙҙо инде ҡайтарып булмаған үткәндәр өсөн борсолоу менән ағыуламағыҙ һәм ваҡытығыҙҙы киләсәк тураһындағы буш хыялдар менән исраф итмәгеҙ, бөгөнгө менән бәхетле булығыҙ! Ҡаршылыҡтарҙы тыныс ҡына уҙғарып ебәрергә өйрәнегеҙ һәм килеп тыуған хәлде яҡшы яҡҡа үҙгәртеү юлын эҙләгеҙ.

**Аныҡ маҡсаттарығыҙ булһын.** Тормоштан һеҙ нимә алырға теләүегеҙҙе аныҡ белергә тейешһегеҙ. Ул ваҡытта борсолоу өсөн урын әҙ ҡалыр, ә маҡсатһыҙ йәшәү күңел тынысһыҙлығына килтерә.

**Проблемаларҙы дөрөҫ хәл итергә өйрәнегеҙ.** Иң тәүҙә үҙегеҙҙе борсоған нәмәләр тураһында яҙып сығығыҙ. Һуңынан һәр проблема тапҡырына уны хәл итеү өсөн үҙегеҙ нимә эшләй алыуығыҙҙы яҙығыҙ, ҡасан эшләүегеҙҙе планлаштырығыҙ һәм был мәсьәләгә тиҙерәк тотоноғоҙ. Бөтә эшегеҙҙе лә көндәлегегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ, ә эшләгәс, һыҙып ҡуйығыҙ - был һеҙҙе тауҙай күренгән, ләкин артыҡ ауыр булмаған борсолоуҙан һаҡлар.

**Ҡыҙыҡлы эш менән шөғөлләнегеҙ.** Әгәр һеҙ юҡ-барға борсолорға ғәҙәтләнгәнһегеҙ икән, ниндәйҙер ҡыҙыҡлы эш менән шөғөлләнегеҙ. Башҡа нәмә тураһында уйланмаҫ өсөн һеҙҙең бер минутығыҙ ҙа буш булырға тейеш түгел - укығыҙ, бейегеҙ, фотоға төшөгөҙ, уйындар уйнағыҙ. Иғтибарығыҙҙы тик бер нәмәгә генә йүнәлтһәгеҙ, һеҙ башҡа ваҡ-төйәк тураһында борсолоуығыҙҙы оноторһоғоҙ.

**Үҙегеҙ менән булып үткән хәлдәрҙе дөрөҫ баһалағыҙ.** Күп кешеләр йыш ҡына ҡайһы бер әйберҙәр өсөн юғары хаҡ бирә. Һеҙгә әлеге ваҡытта ҡиммәт һәм мөһим булып күренгән әйберҙең ваҡыт үтеү менән хаҡы төшөр, шулай булғас, хәҙер ошоноң өсөн ғауға ҡуптарып тороу кәрәкме? Туҡтағыҙ һәм уйлағыҙ: һеҙ түләгән хаҡ артыҡ ҡиммәт түгелме?

**Үҙегеҙҙе ғәйепләү тойғоһонан арынығыҙ.** Һәр осраҡ өсөн борсола белмәү - үҙеңде генә уйлап йәшәү, тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ. Һеҙҙең борсолоуҙарығыҙ нервы ауырыуҙарына һәм ашҡаҙан сиренә килтереүҙән башҡа, бер кемгә лә ярҙам итә алмаҫ. Борсолоу менән шәфҡәтлек күрһәтеүҙе бутамағыҙ, тәүгеһе - ҡурҡыу, икенсеһе - һөйөү уяныу. Шәфҡәтлек күрһәтеү, тимәк, ҡоро, буш борсолоуҙар менән үҙеңде интектереү түгел, ә хәлде үҙенә бороу һәм үҙеңдең тәжрибәң менән ауыр хәл кисереүсегә ярҙам итеү. Шуға күрә, әгәр ярҙам итә алмайһығыҙ икән - ҡайғырыуҙан туҡтағыҙ! Бүтәндәрҙең ҡылығы өсөн үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға кәрәкмәй - улар ҙа хәҙер үҙ аллы кешеләр һәм үҙҙәре ҡарар ҡабул итергә тейештәр.

**Үҙегеҙгә проблема уйлап сығармағыҙ.** Йыш ҡына ниндәйҙер ваҡиға көтҡәндә беҙ әллә нимәләр уйлап сығара, иң насар күренештәрҙе күҙ алдына килтереп, борсола башлайбыҙ. Был ысынында ла шулай булыуы ихтималмы һуң, тип үҙегеҙҙән һорағыҙ. Тынысланығыҙ, әгәр ҙә һеҙ буласаҡ хәлваҡиғаны бер нисек тә үҙгәртә алмайһығыҙ икән, бының өсөн борсолоуҙан туҡтағыҙ. Мәҫәлән, һеҙ имтихан бирҙегеҙ һәм борсолоп, һөҙөмтәһен көтәһегеҙ. Ләкин һеҙ бит юғары билдә алыр өсөн булдыра алғанса тырышҡанһығыҙ, ә борсолоуҙар хәлде үҙгәртә алмаясаҡ инде.

**Ҡурҡыуҙан ҡасығыҙ.** Һеҙ, эшегеҙҙән ҡыуырҙар, ирегеҙ йәки ҡатынығыҙ хыянат итер, балаларығыҙ өмөтөгөҙҙө аҡламаҫ, һимерәм, ябығам, ҡартаям, тип ҡурҡаһығыҙмы? Туҡтағыҙ! Ғаилә именлеген һаҡларға тырышаһығыҙ икән, бөтә ирҙәр һәм ҡатындар ҙа хыянат итмәй икәнен белеп ҡуйығыҙ. Теләк булһа, һәр ваҡыт ябығырға, кәрәк икән, кире һимерергә мөмкин. Ә бөтә кеше лә ҡартая - бында инде беҙ бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ.

**Шәхси етешһеҙлектәрегеҙ менән килешегеҙ.** Әгәр һеҙ үҙегеҙгә оҡшамайһығыҙ һәм шуның өсөн йыш ҡына ҡайғыраһығыҙ икән, һеҙгә үҙегеҙгә ҡарашығыҙҙы үҙгәртергә кәрәк. Үҙ-үҙеңә һөйөү - күңел тыныслығының нигеҙе. Нисек кенә күренеүегеҙгә ҡарамаҫтан, һеҙ үҙегеҙҙе яратырға тейешһегеҙ, артыҡ ҙур өмөттәр яҡшыға килтермәйәсәк. Бөтәһе лә идеаль түгел, журнал тыштарындағы матурматур моделдәр тормошта бөтөнләй икенсе күренә. Шуға күрә үҙегеҙҙе кәүҙә ауырлығығыҙ, буйығыҙ, һипкелдәрегеҙ менән бергә яратығыҙ.

**Эргә-тирәләге фекерҙәр өсөн борсолмағыҙ.** Һеҙҙе бүтәндәрҙең һеҙҙең турала нимә уйлауы борсоймы? Уларҙың үҙҙәренең эше туп-тулы, һеҙҙең турала уйлап ултырырға уларҙың ваҡыты юҡ - быға ышанығыҙ. Шулай булғас, нимә теләйһегеҙ, шуны эшләгеҙ, башҡаларҙың фекере тураһында уйланмағыҙ. Шулай уҡ үҙ-үҙеңә баһаны бер аҙ арттырыу һис ҡамасауламай - был турала бик күп мәҡәләләр яҙылған, китаптар донъя күргән. Шул ваҡытта һеҙҙе тупаҫ һүҙҙәр, башҡаларҙың ҡырын ҡарауы бик борсомаҫ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Республика халҡының сәләмәтлеге нисек? Халыҡтың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу өсөн ниндәй саралар күрелә? III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек саралары сиктәрендә уҙғарылған "Башҡортостан Республикаһы халҡының сәләмәтлеге" республика фәнни-ғәмәли конференцияһына йыйылыусылар ошо һорауҙар буйынса фекер алышты һәм ҡарарҙар ҡабул итте.**

# ҺИНЕҢ СӘЛӘМӘТЛЕКТЕ...

## табип ҡына төҙәтә алмаҫ

Статистика мәғлүмәттәренә күҙ һалһаҡ, Рәсәйҙә үлем осраҡтарының 10 проценты ғына ҡартлыҡ сәбәпсе, үлеүселәрҙең 70 проценты төрлө сирҙәр, 20 проценты төрлө йәрәхәттәр алыу, һәләкәттәр һөҙөмтәһендә яҡты донъя менән хушлаша. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе, профессор Марс Юлдашев билдәләүенсә, республика халҡының сәләмәтлегенә иң тәүҙә экология торошо тәьсир итә. Беҙҙең төбәктә күп кенә химия, нефтехимия, башҡа эшкәртеүсе етештереүҙәр тупланған. Көньяҡ Урал районддарында урынлашҡан тау сәнәғәте предприятиеларының кеше һаулығы өсөн ни тиклем зарарлы икәнен беҙ тулыһынса асыҡлап та бөтмәгәнбеҙ әле.

- Халыҡтың физик сәләмәтлек торошона рухи сәләмәтлеге ҡаҡшауы ла тәьсир итә бит, - тигән ҡыҙыҡлы фекер әйтте был кәңәшмәлә Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре кандидаты, 8-се һанлы дауахананың хирургия бүлеге етәксеһе Салауат Бакиров. - Кешенең физик сәләмәтлеге туранан-тура унын аңына бәйләнгәнгә күрә, бөгөнгө көндә халыҡтың аңын таҙартыу, үҫтереү ҙә мөһим мәсьәлә булып тора. Халыҡтың аңы таҙа булһа, унын физик сәләмәтлеге лә яҡшы булыр, көслө рухлы йәштәр артыр, улар үҙҙәренән һуң сәләмәт быуын ҡалдырыр, уларҙа илһөйәрлек, ватансылыҡ кеүек тойғолар көслө булыр, заман ауырлыҡтарына бирешмәҫ. Шуға күрә беҙ, халыҡ сәләмәтлеге һағында тороусылар, халыҡтың физик хәлен генә түгел, ә унын рухын үҫтереү, аңын сафландырыуҙы ла үҙебеҙгә маҡсат итеп алырға тейешбеҙ.

Республикабыҙҙың билдәле табиптары, медицина хеҙмәткәрҙәре үҙҙәренең сығыштарын республикала сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалауға, балаларҙың һаулығын нығытыу, ғаилә именлеген, етем балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлау, репродуктив сәләмәтлекте һаҡлау, әхлаҡи һәм рухи ҡиммәттәрҙе үҫтереү проблемаларына арнаны. Шулай уҡ республиканың экологик хәле, унын кеше һаулығына зыяны, экологик факторҙарҙың йәштәрҙең психофизиологик һаулығына тәьсир итеүе тураһында ла әйтеп үтелде.

**Нәзирә АБДУЛЛИНА яҙып алды.**

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**Быйылғы отпускым ҡағыҙ эштәренән башланып китте. Үҙегеҙ беләһегеҙ - документ йыйыу анһат түгел. Бер белешмәне алғансы, икенсеһенең ваҡыты сыға, берәүһенә сират етһә, тәүгеһен яңыртырға кәрәк.**

# ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘ ЛӘ...

## һыуға һал - халыҡ белер

Шулай кәрәкле документты ала алмай, бер ойошманан икенсеһенә өсәр-дүртәр тапҡыр йөрөргә тура килде. Бер барғанымда урта йәштәрҙәге ҡатын яныма килеп иҫәнләште һәм ниндәй йомош менән йөрөгәнемде һорашҡас, ҡулымдағы паспортымды тартып тигәндәй алды ла, минә иң кәрәкле теге белешмә бирелергә тейешле ишеккә йүнәлде. Йөҙө таныш, әммә кем икәнен иҫкә төшөрә алманым. Ярай, кем булһа ла булһын, иң мөһиме - документ алып сыға алһын, тип, үҙемде тынысландырҙым. Күп тә үтмәй, белешмә менән килеп сыҡты: "Бынан күп йылдар элек улыма ярҙам иткәйнегеҙ", - тине лә, икенсе ишеккә инеп юғалды. "Рәхмәт... " тип әйтергә генә өлгөрҙөм артынан.

Белешмәне тейешле урынға тапшырып ҡайтып килгәндә иҫкә төштө был мөләйем ҡатындың кемлеге. Байтаҡ йылдар үтһә лә, ул ваҡиға кисә генә булған кеүек күҙ алдынан үтте.

...Көҙгө каникулдан һуң тәүге уҡыу көнө ине. Тәнәфескә шылтырағас та, хәҙер мин дәрес үткәрәсәк кластың етәксеһе килеп инде. Урыҡ-һурыҡ һөйләүенән шуны аңланым: класына яңы уҡыусы килгән. Бик ауыр үҫмер, уның менән бик итәғәтле һөйләшергә, мөмкин булһа, бөтөнләй күрмәмешкә-ишетмәмешкә һалышырға. Һаҡлыҡ менән, хатта ҡурҡып әйткән төҫлө тойолдо ул минә был һүҙҙәрҙе. Шуға ла аңлағанын - аңланым, аңламағанын - юҡ. Әллә, наркоман да, тине инде...

Дәрескә ҡыңғырау шылтыраны. Бүтән ваҡыт бер-береһенең өҫтөнә менә яҙырҙай булып йүгергән уҡыусылар был юлы бик тыныс, һаҡ ҡына ингән кеүек. Әллә үҙем шикләнгәнгә шулай тойолдо... Класс етәксеһе әйтмешләй, яңы уҡыусыны күрмәмешкә һалышыу бер нисек тә мөмкин түгел. Иң буйсан үҫмерҙе нисек күрмәйһең инде: "Яңы уҡыусы бар икән, бик яҡшы", - тигән булдым. Егет туп-тура күҙгә ҡарай, әйтерһең дә, уҡытыусы менән булған һөйләшеүҙе ишеткән.

Дәрестә, гәзәттәгесә, үткән теманы ҡабатлауҙан башланым. 13-14 йәштә балалар бик үк ҙурҙәре теләп яуап бирер бармай, баҫтырһаң да: " Ә ни эшләп мин ?"- тигән ҡиәфәттә аланйолан ҡаранып алғас ҡына яуап бирә. Класҡа һорау биргән һайын, яңы уҡыусы урынынан ҡалҡынып ҡуя - күҙҙәренән уның теманы белгәнен тойҙом. Яңы тема аңлатҡанда вайымһыҙ булып ултырған кеүек булһа ла , бөтәһен дә иғтибар менән "компьютеры"на һалып ултырҙы. Бер һүҙ менән әйткәндә, киң маңлайлы, аҡыллы күҙле, аҡ йөҙлө үҫмер минә оҡшаны.

Башҡортостан мәҙәниәте дәресе аҙнаһына бер генә. Шуға уның менән йәнә ете көндән һуң ғына осраштыҡ. Уның быға тиклем уҡыған мәктәбенән наркотик ҡулланған өсөн ҡыуылғанлығын белә инем. Ниңәләр был хәбәргә ышанғым килмәне. Башҡортостан мәҙәниәте ул осорҙа уҡытыусылар өсөн дә, уҡыусыларға ла яңы предмет, шуғалырмы, уға бик үк етди ҡараш булманы, ә был үҫмер фәнде яҡшы белеүе, унының да мөһимерәк - дәресте яратыуы менән иғтибарымды яуланы. Бер ай самаһы ваҡыт үткәс, туранан-тура: "Һеҙ ҙә мине наркоман, тип уйлайһығыҙмы?" - тип һораны. Уның хаҡында нимә уйлағанымды ишеткәс, ошо турала һөйләне ул минә.

...Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән атаһы 90-сы йылдар башында бик тиҙ генә байып китә. Тик матди хәле нығынған һайын, әхлаҡи яҡтан ярлылана бара ул. Иң беренсе өйҙәге китап шкафын сүплеккә ырғыта, урынына затлы келәм элә һәм алтын балыҡтар йөҙгән ҙур аквариум ултыра. Китап булмаған өй йәне булмаған кәүҙәгә оҡшап ҡала. Атаһы кеҫәһе ҡалынайған һайын, өйҙәгеләргә аяуһыҙыраҡ, ҡатыраҡ була бара, бер сәбәпһеҙ үҫмер улына, уның әсәһенә лә ҡул күтәрә башлай. Шул ваҡытта егет атаһына ҡаршы "иммунитет" булдыра: тәүҙә тиҫтерҙәре менән подвалдарҙа елем кеүек ағыулы матдә еҫкәп ҡайта, һуңғараҡ төрлө таблетка ҡуллана башлай. Быны белеп ҡалған атай уҡытыусыларына хәбәр итә. Директор иһә проблеманан ҡурҡып, үҫмерҙе шунда уҡ мәктәптән ҡыуа. Шул арҡала бала әсәһе менән бергә ярты уҡыу йылында беҙҙең ҡалаға килеп юлыға.

"Һеҙ, ысынлап та, минең наркоман икәнлегемә ышанмайһығыҙмы?" - тине ул. Наркотикҡа бәйле кешене нисек күҙ алдына килтергәнемде һөйләп бирҙем. Наркоманды енәйәтсе менән сағыштырғанымды белдерҙем. Ысынлап та, һәр наркоман буласаҡ енәйәтсе бит.

Оҙаҡ уҡыманы яңы уҡыусы беҙҙең мәктәптә. Әсәһенә тотороҡло эш булмағас, икенсе ҡалаға күстеләр, тинеләр. Бына ун биш йылға яҡын ваҡыт үткәс, әсәһе менән осрашырға тура килде. "Улыма ярҙам иткәнегеҙ өсөн", - тине. Тимәк, егет дөрөҫ юлға баҫҡан, теге һөйләшеү уға ышаныс биргән.

Быны ни өсөн һөйләйемме? Изгелек ерҙә ятып ҡалмай, тигәнгә бер бәләкәй генә миҫал ул. Күп ваҡытта кешегә ана шул һүҙ ярҙамы ла етә. Мохтаж булғандарға йылы һүҙебеҙҙе йәлләмәйек, ышаныс бирәйек, тип әйтмәксемен.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БЫЛ - ГОНАҺ!



# АЛКОГОЛЛЕ ЭСЕМЛЕК...

## тыйылған ғәмәл

Ҡөрьәндең "Бәҡара" сүрәһенең 219-сы аятында былай тип әйтелә: "Улар һинән хәмер һәм отош уйыны тураһында һорай: "Быларҙың икеһендә лә бөйөк гонаһ һәм кешеләргә ниндәйҙер файҙа бар, әммә уларҙың гонаһы файҙаһынан ҙурыраҡ!" - тип әйт. Йәнә һинән саҙаҡаның нисек бирелергә тейешлеге тураһында ла һорарҙар. Һин: "Ихтыяжыңдан артҡанын бир", - тип әйт. Бына шулай аңлата һеҙгә Аллаһ үҙ аяттарын, моғайын, һеҙ фекер йөрөтөп ҡараһығыҙ".

Ә "Мәидә" сүрәһенең 90-сы, 91-се аяттарында: "Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Хәмер, отош уйыны, һындар, уҡтар (отош уйыны өсөн) - шайтан эшенән булған шаҡшылыҡтар. Уларҙан һаҡланығыҙ, моғайын, һеҙ бәхетле булырһығыҙ!" "Хәмер һәм отош уйыны менән шайтан һеҙҙең арағыҙға дошманлыҡ һәм нәфрәт һалырға теләй; һеҙҙе Аллаһты иҫкә алыуҙан һәм намаҙ уҡыуҙан тайҙырырға теләй. Тыйылырһығыҙмы һеҙ?" - тип әйтелгән.

Ибн Ғәббәс һөйләй: "Спиртлы эсемлектәр эсеү тыйыла, тигән аят төшөрөлгәс, ҡайһы бер сәхәбәләр башҡаларға: "Бөгөнгө көндән спиртлы эсемлектәр эсеү харам һәм күп илаһилыҡҡа тиңләштерелә", - тип әйтте".

Ғабдуллаһ ибн Ғүмәр спиртлы эсемлектәрҙе ҡулланыуҙы иң ауыр гонаһҡа индергән. Спиртлы эсемлектәр, һис шикһеҙ бөтә насарлыҡтың сәбәпсеһе.

Абдуллах бин Әмир еткерә: "Әгәр кем дә булһа иҫерек булып бер намаҙын ҡалдырһа, был унан ошо донъяны тартып алғанға тиң булыр. Ә иҫерек булып дүрт намаҙын ҡалдырған кешегә Аллаһ ысынында "Тинетуль-Хабал" эсерәсәк". Шул ваҡыт сәхәбәләр: "Эй, Аллаһ илсеһе! "Тинетуль-Хабал" нимә була ул?" - тип һораған. Ул: "Тамуҡ әһелдәренең ҡаны һәм эрене", - тип яуап биргән.

Джабир һөйләй:

"Аллаһ эскесене "Тинетуль-Хабал" менән туйындырырға хаҡлы". Шул ваҡыт сәхәбәләр: "Ә Тинетуль-Хабал" нимә була ул?" - тип һораған. Илсе: "Тамуҡ әһелдәренең тире", - тип яуап биргән.

"Һәр ваҡыт спиртлы эсемлек эсеп, шул хәлендә үлгән кеше, Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһына күп илаһҡа табыныусы хәлендә барып баҫасаҡ".

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Ҡурҡыу - ул наҙанлыҡ шәүләһе

Ҡурҡыу - айырым шәхестәрҙең генә түгел, дөйөм йәмғиәттең ҙур проблемаларының береһе. Ул беҙгә үҙ фекеребеҙҙе тулыһынса асып бирергә, үҙебеҙҙе һәм бүтәндәрҙе яратырға ҡамасаулай. Сәбәпһеҙ һәм аңһыҙ рәүештә ҡурҡыуҙан беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙе күҙгә күренмәгән төрмәгә бикләп ҡуйғандай итәбеҙ.

Шулай ҙа ҡурҡыу беҙгә яҡшы яҡтан да йоғонто яһай ала. Ниндәйҙер кимәлдә ул беҙгә үҙебеҙҙе һаҡлау өсөн кәрәк. Ҡурҡыуҙы һиҙемләй алыу беҙҙе хәүеф тураһында иҫкәртә һәм шул рәүешле беҙҙе юғалтыуҙарҙан һаҡланып ҡалырға ярҙам итә. Әгәр беҙ кисҡен хәлваҡиғаларҙың эҙемтәләре алдында бер ниндәй ҙә ҡурҡыу тойғоһо кисермәһәк, "фәрештәләр төшөргә ҡуҡҡан ергә" лә ташланған булыр инек.

Шулай ҙа беҙ йышыраҡ осраҡта бөтөнләй зыян килтермәҫтәй нәмәләрҙән ҡурҡабыҙ. Беҙ үҙебеҙҙең кире хис-тойғолар тулҡынында кисергән хәүеф тойғоһон ҡурҡыу һәм паникаға еткереп, үҙебеҙҙе ҡуҙғытабыҙ. Беҙ алдан күҙалланған хәүеф алдында бөршәйеп ҡалып, артабанғы аҙымдарҙан баш тартабыҙ. Кире ҡағыуҙарҙан ҡурҡып, ысынлап та мохтажлыҡ кисергән әйберҙе һорай һалып бармайбыҙ. Беҙ уңышһыҙлыҡҡа юлығыуҙан ҡурҡып, үҙ өҫтөбөҙгә ниндәйҙер йөкләмәләр алыуҙан баш тартабыҙ. Үҙебеҙ күҙ алдына килтергән ниндәйҙер идеалыбыҙға тап килмәүҙән ҡурҡып, шәхсәнлегебеҙҙе юғалтыуыбыҙ ҙа ихтимал. Шуға ла беҙгә ярҙам итеүсе һәм зыян килтереүсе ҡурҡыуҙы бер-береһенән айыра белеү мөһим.

Беҙгә хас булған һаҡланыу тойғоһо арҡаһында күптәребеҙ тиҙ генә килешеүгә барып, аҙы менән ҡәнәғәтләнеүсән. Ни өсөн? Интеллектуаль кимәлдә генә түгел, ә күберәген эмоциональ йәки рухи наҙанлыҡ арҡаһында. Күптәребеҙ бала саҡта нимәнәлер өрәк йәки аждаһа итеп ҡабул итеп, ҡурҡып ҡалған, ә ул, ысынында, бары тик ниндәйҙер әйбер күләгәһе йәки елгә елпенгән ҡорған ғына булып сыҡҡан. Беҙҙең ҡурҡыу ысын шулай булғандан түгел, ә үҙебеҙ шулай булыуы ихтимал, тип иҫәпләү арҡаһында килеп тыуған. Иррациональ ҡурҡыу булыуы мөмкин булған иң насар хәлдә көтөү нигеҙендә барлыҡҡа килә. Шулай уҡ, бала бер көн килеп өрәктең ысынбарлыҡта булмауын һәм унан ҡурҡырға кәрәкмәгәнлеген аңлаған кеүек, беҙ ҙә күпселек хәүефтәребеҙ өрәк ише генә булыуын аңлай алабыҙ.

Әйберҙәрҙең ысынбарлыҡтағы хәл-торошон йыш ҡына интеллектуаль кимәлдә генә аңлау етмәй. Йөҙөргә ҡурҡҡан кеше аңы менән һыу уны күтәрәсәген һәм һис кенә ҡурҡыр урын юҡлығын аңлай ала. Әммә бүтәндәрҙең бер ниндәй көс һалмайынса, рәхәтләнеп йөҙөп йөрөүен күҙәтеү генә, үҙе быны кисермәгән кешелә ҡурҡыу тойғоһон кәметмәйәсәк.

Иң ҙур ҡурҡыу - үлемдән ҡурҡыуҙы алып ҡарайыҡ. Клиник үлем кисереп, унан бүтәнсә ҡурҡмаған кешеләр тураһында күп хәбәрҙәр йөрөй. Беҙҙең үлемдән ҡурҡыуыбыҙ - ул күпселек кимәлдә билдәһеҙлектән ҡурҡыу, беҙҙең наҙанлығыбыҙ шәүләһе ул. Һәр ирраациональ ҡурҡыу артында иллюзия тора. Ҡурҡыуҙарыбыҙҙың күбеһе үҙебеҙгә ҡарата түбән баһа йөрөтөүҙән барлыҡҡа килә. Беҙ бүтәндәрҙең беҙҙе хупламауынан ҡурҡа алабыҙ, сөнки үҙебеҙ тураһында уларҙың баһаһына ҡарап фекер йөрөтөү гәҙәтендә эйәбеҙ. Әммә үҙебеҙҙең һөләтебеҙгә төшөнгәндә һәм маҡсатыбыҙ булғанда, беҙ бер ваҡытта ла былдай хәүеф-хәтәр кисермәйәсәкбеҙ.

Боронғо әйтемдә ишеткәнегеҙ барҙыр: "Һин белмәгән әйбер һинә зыян килтерә алмай". Хәҡиҡәттән наҙанлыҡтан башҡа бер нәмә лә шул тиклем алыҫ тора алмай, наҙанлыҡ әле бер кемгә лә бәхет килтергәне юҡ, киреһенсә, ул ҡурҡыуға һала һәм ҡаушата ғына. Үҙендең ни тиклем бөйөк фатихаң барлығын һәм бүтәндәргә ниндәй ҙур ярҙам күрһәтә алыуыңды аңлағанда, ялған ҡурҡыу шәүләһе һинең өҫтөңдән башҡаса хакимлыҡ итмәйәсәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 26 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 110-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Брак по завещанию", 9-я серия. Мелодрама
22.30 "Великая война". "Курская дуга". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "Молодой лейтенант"
03.00 Новости
03.50 "Как я встретил вашу маму"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 03.35 "Никита Карацупа. Следопыт из легенды"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Гражданин начальник-2". Сериал
13.40, 04.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 49-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 40-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Легенды колдовской любви", 5-я и 6-я серии. Сериал
22.50 "Сонька золотая ручка", 8-я серия. Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Мой серебряный шар"
01.05 "Честный детектив"
01.45 "Боевик Джексон"

### НТВ

06.10 "Таксистка". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Висяки". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Ментовские войны". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Кодекс чести". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.50 "Затерянный город"
04.00 "Под вишневой луной"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Погода"**
**10.05 "Полезные новости"**
**10.15 "Виктория". Сериал**
**11.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.30 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"**
**13.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.45 Мультфильм**
**17.00 "Виктория"**
**17.50 "На своей земле"**
**18.15 "Здоровье"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Лица времени"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Башкортостан в годы Великой Отечественной войны"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 27 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 111-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Брак по завещанию", 10-я серия. Сериал
22.30 "За гранью возможного". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.00, 03.05 "Бартон Финк"
03.00 Новости
03.20 "Озеро страха-2"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
